*Әгәр ҙә һиңә башҡалар һинең ғәҙеллек менән һоҡлана кеүек тойолһа, шуны бел: улар һинең ғәҙеллек менән түгел, ә Аллаһтың һинең гонаһтарыңды ҡаплаған япмаһы менән һоҡлана. Әгәр ҙә улар һиңә: "О, ниндәй тыңлаусан, әҙәпле, Аллаға буйһоноусан кеше!" - тип әйтә икән, шуны бел: был һүҙҙәр: "О, Аллаһтың уның гонаһтарын ҡаплаған япмаһы ҡалай гүзәл!" - тигәнде аңлатыр.*

*(Әл-Бохари).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

31 МАЙ - 6 ИЮНЬ (ҺАБАНАЙ - ҺӨТАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№22 (596)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Һуңғы ҡыңғырау"...

мәктәп менән хушлаштырҙы



5

Блогерҙарға көн бөтәме,

әллә уларға ла тыйыуҙар кәрәкме?



6

Алма ағасынан алыҫ төшмәй,

йәғни Ер йөҙөндә үҙенең геномында нәҫелдән күсеүсе ниндәйҙер сирҙең мутацияһын йөрөтмәгән бер генә кеше лә юҡ



8-9,12

"Шүлгәнташ" фильмы...

балаларға матур бүләк булды



11

14 ТВ-программа


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Аҡсаларын төтөнгә әйләндереп, ғаиләһе бюджетына зыян килтереүсе һәм шуның менән бай монополист кеҫәһен ҡалынайтыуға булышлыҡ итеүсе тәмәке ҡолдарына был яман ғәҙәттәренән арыныу өсөн ниҙәр эшләргә кәрәк, тип уйлайһығыҙ?

***Заря БИКТАШЕВА, ата-әсәләр, балалар һәм үҫмерҙәр араһында сәләмәт тормош рәүешен пропагандалаусы волонтер:*** Теләһә ниндәй миҡдарҙа тәмәке, алкоголь һәм наркотик ҡулланыу - аҡылһыҙлыҡ һәм ихтыярһыҙлыҡ билдәһе ул. Ағыу ҡулланыуҙан үҙ теләге менән баш тартыу өсөн тәмәкесе йә эскесе иң тәүҙә шуны аңларға тейеш: эсеү, тартыу, наркотик ҡулланыу кешенең шәхси эше түгел, сөнки был яман ғәҙәт арҡаһында уның балалары, ата-әсәһе, уның янындағы башҡа кешеләр һәм хатта тотош йәмғиәт зыян күрә. Төркөмләшеп тартып торған ҡыҙ балаларҙы күреүе бигерәк ытырғаныс миңә. Ғәҙәттә, ундайҙар янынан ҡарашымды ергә төбәп, шым ғына үтеп китмәйем, ә эргәләренә киләм дә шундай һорау бирәм: "Бына һеҙ, ҡыҙҙар, тартыуын тартаһығыҙ ҙа бит, ә киләсәктә балағыҙҙың күҙегеҙгә тура ҡарап: "Әсәй, мин ниңә башҡа балалар кеүек түгелмен, ниңә минең аяҡтарым атламай, күҙҙәрем күрмәй? Ә ниңә минең атайым юҡ? Һин мине түгел, тәмәкене нығыраҡ яратаһыңмы?" - тигән һорауҙарына яуап тоторға әҙерһегеҙме?" Күптәренә был тәьҫир итмәй ҡалмай. Улар ҡараштарын минән йәшереп, тиҙ генә тәмәкеләрен һүндерә һалалар. Шул урында мин уларға ғибрәтле һандар һәм факттарҙы ҡулланып, бәләкәй, ләкин фәһемле генә әңгәмә үткәреп китәм. Мәҫәлән, тәмәкесенең үҙ-үҙен радиация менән ағыулауын беҙҙә күптәр белмәй, ә көнбайышта был хаҡта күптән һөйләйҙәр. Бер ҡап тәмәкелә радиация дозаһы норманан 7 тапҡырға артып китә икәнлекте улар, әлбиттә, белмәй йә был хаҡта "баш ватырға" теләмәй. Ә бына уйлау һәләтен юғалтып өлгөрмәгән, яман ғәҙәте арҡаһында выждан ғазабы кисереүсе кешеләргә кисекмәҫтән тәмәкене йәки араҡыны ташларға ярҙам итергә тырышырға кәрәк. Ундайҙарға ҡарата мин табип Г. Шичконың асышын файҙаланып, үҙ-үҙенде ышандырыу тексын тәҡдим итәм. Уны көн һайын кис йоҡлар алдынан яҙырға кәрәк. Ғәжәп, ләкин яман ғәҙәттәр менән яфаланыусыларҙың ағыуға булған бәйлелеге кәмей, юҡҡа сыға бара. Был бер ҙә генә мөғжизә түгел, ә үҙ өҫтөндә көндәлек ныҡышмал хеҙмәт, ихтыяр көсө. Ошо ысулды мин үҙем һынап ҡараным: ике йыл буйы минең ҡотто алған сирҙән операцияһыҙ ҡотолдом. Тәмәкегә бәйлелек - шул уҡ сир бит ул, унан ҡотолорға әҙер булғандарҙы әлеге алым менән ентекләберәк таныштыра алыр инем, тик мөрәжәғәт итһендәр генә.

***Заһир ИШКИНИН, йәш эшҡыуар:*** Тәмәке тартмайым, сөнки уның зыянынан башҡа бер генә файҙаһын да күрмәйем. Бала саҡта уҡ әле малайҙар менән шаярып ҡына тартып ҡарағайным, был миңә бер ҙә оҡшаманы - аҙаҡ оҙаҡ ҡына ҡыйын булып торҙо: сәсәтте, унан тамаҡ төбө әсетеп, бер талай уҡшытып йонсотто. Башҡаса тәмәкегә тотонманым да, уға ихтыяж да тыуманы. Әйткәндәй, атайым да тартмай. Ә бит малайҙар, ғәҙәттә, атаһынан өлгө алырға тырыша. Шуға ла кемдең атаһы тәмәкесе, уның улдары ла күп осраҡта ошо "әсе яҙмышты" үҙ итәлер, тигән уйҙамын. Шуның өсөн дә балаһының һаулығын, ғөмүмән, киләсәген ҡайғыртҡан, уларҙы үҙенә ҡарағанда нығыраҡ яратҡан ата-әсә сәләмәт тормош алып барырға, һәр яҡлап өлгө булып торорға тейеш. Ә ҡайһы берәүҙәр, киреһенсә, фәҡәт үҙ хәжәтен генә ҡайғырта, был эгоизм ғына түгел, бәлки, башҡаларға, хатта ки яҡындарына ҡарата ла аяуһыҙлыҡ, битарафлыҡ, тип атала. Беҙҙең йәмғиәттә бит ғаилә башлығының тәмәке тартыуы менән килешеп йәшәйҙәр, был яман ҡылыҡ ғәҙәти хәл тип ҡабул ителә, бер кем һүҙ әйтмәй: әсә кеше лә быны ҡабул итә, балалар иһә күптән "атаһын өйрәтмәй". Бәлки, был уларҙың башына ла инеп сыҡмайҙыр әле. Шуға күрә, ир-егет өйрәнелгән, күнегелгән тормош рәүешен үҙгәртергә уйламай ҙа. Ҡала ерендә, ярай ҙа, файҙаһы әллә ни күренмәһә лә был йәһәттән ниндәйҙер аңлатыу эштәре алып барыла. Ә бына ауылдарҙа был хәл кемде борсоһон инде?

**(Дауамы 2-се биттә).**

**Әйткәндәй, 1 июндән тәмәкенең зыяны тураһындағы закондарға өҫтәмә төҙәтмәләр инделәр: хәҙер ресторан һәм кафеларҙа тартыу тулыһынса тыйыла, шулай уҡ алыҫ араға поездарҙа һәм ҡунаҡханаларҙа ла тәмәке көйрәтеү рөхсәт ителмәй. Тәмәкегә хаҡтар артасаҡ.**

## "КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!

# ЗАМАНДАШЫБЫҘ ИТЕП КҮРӘБЕҘ

**"Киске Өфө" гәзитен беҙҙең театр тәүге һандарынан алдыра һәм бөтөн коллективыбыҙ менән уҡыйбыҙ. Был баҫма заман һулышы менән йәшәүе, көнүҙәк мәсьәләләрҙе күтәреп сығыуы менән әһәмиәтле. Гәзитте ысын мәғәнәһендә зыялылар уҡый, тип уйлайым, сөнки ул халҡыбыҙҙың рухи ҡиммәттәрен барлауҙы, берҙәмлек булдырыуҙы, аңды, сәмде күтәреүҙе маҡсат итеп ҡуйған.**

**(Дауамы 2-се биттә).**



Милли йәштәр театры артистары.

✓ *Йәш саҡта ни, тәмәке тартыуҙы үҙенә күрә егетлек тип бик яңылышҡанмын икән шул. Егетлек күрһәткең килһә, әйҙә, ана, спорт менән шөғөлләнеп, ҡайырып аҡса эшлә, йорт һалып ин, матур ғаилә ҡороп, улдар-ҡыҙҙар үҫтер!*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Аҡсаларын төтөнгә әйләндереп, ғаиләһе бюджетына зыян килтереүсе һәм шуның менән бай монополист кеҫәһен ҡалынайтыуға булышлыҡ итеүсе тәмәке ҡолдарына был яман ғәҙәттәренән арыныу өсөн ниҙәр эшләргә кәрәк, тип уйлайһығыҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Әнүәр МОНАСИПОВ, 30 йыл стажлы тәмәкесе, автобус водителе:*** Миңә 48 йәш. Ныҡлап тәмәке менән армияла хеҙмәт иткәндә "дуҫлашып" китергә тура килде, шунан алып тартам да көйрәтәм генә. Йәшерәк саҡта һиҙелмәй ине, әле ҡаж-ғож йүтәлләтә башланы, йыш ҡына тын ҡыҫыла. Нимәһе иң ҡурҡынысы: шундай саҡта тартып ебәрһәң, еңелерәк булып ҡалғандай, ләкин бер аҙҙан тәмәке касафаттары яңынан башлана, айырыуса иртәле-кисле йонсота. Тағы көйрәтеп ебәрәһең - бына шундай тоҙаҡҡа эләгеремде белгән булһам, ауыҙға ла алмаған булыр инем дә бит... Йәш саҡта ни, тәмәке тартыуҙы үҙенә күрә егетлек тип бик яңылышҡанмын икән шул. Егетлек күрһәткең килһә, әйҙә, ана, спорт менән шөғөлләнеп, ҡайырып аҡса эшлә, йорт һалып ин, матур ғаилә ҡороп, улдар-ҡыҙҙар үҫтер! Мин быны бик һуң аңланым. Юҡ, былай тормошом шөкөр: ғаиләм, улым да, ҡыҙым да бар, тик һуңғы ваҡыт ана шул тәмәке өсөн ҡатын ныҡ битәрләй, өйҙә тарттырмай. Подъезға сыҡһаң, күршеләр әрләшә - ҡайҙа барырға? Ҡыш көндәре 5-се ҡаттан тышҡа сығып тартып булмай бит инде. Лоджияла тартам, ләкин еҫе барыбер күршеләргә тарала. Ҡатыным элек бик өндәшмәй ине, әле улымдың да тартҡанын белеп ҡалған да, шуның ғәйебен минән күрә: йәнәһе, атаһы ниндәй - улы ла шундай, икәүләшеп елгә аҡса осораһығыҙ, тәмәке хәҙер ҡиммәт, тип әрләй. Аҡсаһы - аҡса, ләкин күп ғаиләләр өсөн был да һиҙелерлек сығымдыр, һүҙ ҙә юҡ. Ә бына ологая килә тәмәкенең сәләмәтлекте ҡаҡшата башлауы мине бик борсой, бигерәк тә улым өсөн хәүефләнәм. Үҙемдең әсе тәжрибәнән сығып, уны тыйып ҡарайым, тик ул, һин ташлаһаң, мин дә ташлармын, тип, миңә шарт ҡуя. Хәҙер бына нисек итеп ташлау тураһында уйланам - аныҡ ҡарарға килергә тура килер шулай ҙа, юғиһә, эштә лә һүҙ тейә башланы: пассажирҙар шулай уҡ тәмәке төтөнө һулап барырға теләмәй - береһе тотҡан да беҙҙең автобус паркы хужаһына ялыу яҙып ебәргән. Начальник та мәсьәләне ҡаты ҡуйҙы: йә эштән китәһең, йә тәмәкеңде ташла, ти. Ҡапыл ғына ташлау мөмкин түгел, ти эштәге егеттәр, ләкин бөтә булған ихтыяр көсөңдө туплап тотонһаң, өҫтәүенә, эшеңде юғалтыу ихтималын да уйлаһаң, үҙеңдән-үҙең ташларһың, тиҙәр.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!

# ЗАМАНДАШЫБЫҘ ИТЕП КҮРӘБЕҘ

**(Башы 1-се биттә).**

"Киске Өфө"нө милләтебеҙҙең олоһо ла, кесеһе лә уҡыһын ине, тип теләйбеҙ. Сөнки ул йәштәр өсөн ил-тел тәрбиәһе биреүсе, аҡыллы фекер йөрөтөргә өйрәтеүсе дуҫ, кәңәшсе булһа, аяҡтарында ныҡлы баҫып торғандарға иһә бөгөнгө көндә барыбыҙҙы ла борсоған һорауҙарға яуап табышҡан, төрлө хәлдәрҙән сығыу юлдарын эҙләшкән замандаш булып тора. Бигерәк тә тарихи хәтер ебе өҙөлмәүгә, асылыбыҙға ҡайтырға өндәгән мәҡәләләр оло ҡиммәткә эйә. Үткәндәрҙе байҡап, тарихыбыҙға таянып, фәһем, үрнәк алыу һәм шул уҡ ваҡытта заман менән бергә атлау, алдынғы ҡарашлы булыу - ошондай бер-береһенә оҡшамаған мәсьәләләрҙе хәл итеүсе гәзиттең һәр һаны үҙе бер хазина. Уҡыйһың, уҡыған һайын уйланаһың, нимә йәки кем менәндер килешәһең, кемгәлер ҡаршы киләһең - "Киске Өфө"нөң фекер алышыу майҙаны һәр ваҡыт геүләп тора, унда сығыш яһаусылар башлап ебәргән бәхәс ҡорон башта әйләндереп-тулғандыраһың, үҙеңсә һығымталар яһайһың, шунан халыҡ фәме һинең күңеләңә күсә. Ошо түгелме тулы ҡанлы йәшәү, йәшнәү өлгөһө? Дөрөҫөн әйткәндә, "Киске Өфө"нөң яңы һанын алыу менән: "Ҡайҙа, әҙерәк ял итеп алайым әле", - тип уйлағаным хәтеремдә юҡ. Сөнки матур, бай, ҡомарлы туған телемдә яҙылған мәҡәләләрҙе уҡыған һайын халҡымдың тәрән фекер йөрөтөп, уйҙарын тос итеп ярып һала белгән уҡымышлы кешеләре менән ғорурланам, күпте күргән ағай-апайҙарҙың тел төбөн аңларға тырышам, йәштәштәремдең донъяға ҡараштарын уртаҡлашам.

Бер һүҙ менән әйткәндә, бөгөнгө көндә милләтебеҙҙең киләсәк яҙмышы өсөн борсолған баҫма үҙенең изге маҡсатына өлкәшкән замандашыбыҙ булып тора һәм беҙ уға оҙон-оҙаҡ йылдар илһамланып ижад итеүен теләйбеҙ! Хеҙмәт юлың яҡты булһын, "Киске Өфө"!

**Лилиә ИСҠУЖИНА,**
**М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры артисы.**

ИҒТИБАР!

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамланыуға бик аҙ ғына ваҡыт ҡалып бара. Киләсәктә лә "Киске Өфө" гәзитенең тоғро уҡыусылары икәнегеҙҙе раҫлап, беҙгә дуҫ, теләктәш, таяныс булып ҡалыуығыҙҙы бик-бик теләйбеҙ. Әлеге миҙгел - баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана икәнде йөрәгегеҙ менән аңлаһағыҙ ине, тибеҙ.**

● Шулай итеп, 2014 йылдың икенсе яртыһына **50665** индекслы "Киске Өфө" гәзитенә **507 һум 72 тингә**, **50673** индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) **537 һум 72 тингә** яҙылып була.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ.**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **336 һумға** яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - **246 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **246 һум**.

● **Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында **"Яҙылыу"** тигән төймәгә баҫып, **"Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу (534 һум 42 тин)"** һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

● Республика ҡалаларында йәшәүселәр гәзитте почтанан үҙе барып алыу шарты (до востребования) менән **382 һум 50 тингә** яҙыла ала.



● **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Июндә 2014 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ Гөлнур Яҡупованың **"Төш юрау китабы"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● **Беҙҙең сайт:** *www.kiskeufa.ru.* Беҙҙең электрон почта: *info@kiskeufa.ru.* Беҙҙең блог: *blog.kiskeufa.ru.*

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов 2014 йылда республикала "Һабантуй" халыҡ байрамын үткәреү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы, тип хәбәр иттеләр төбәк башлығының матбуғат хеҙмәтенән. Документҡа ярашлы, БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫарҙары Эрнст Исаевҡа һәм Лилиә Ғүмәроваға район һәм ҡала хакимиәттәре менән берлектә байрамды ойоштороуҙы тәьмин итергә ҡушылды.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Ҡытайҙағы һәм Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумындағы эшкә йомғаҡ яһаны. Республика башлығы Ҡытай Халыҡ Республикаһы предприятиелары һәм территориялары менән үҙ-ара эш итеү буйынса эшсе төркөм ойоштороға ҡушып, "был эшсе төркөмдөң эш планын билдәләргә, килешеүҙәрҙең үҫешен эш планында теркәргә, эшләнгән бөтә эштәрҙе яҙырға һәм шулай итеп Ҡытай Халыҡ Республикаһы йүнселдәре менән эште артабан алып барырға кәрәк", тип билдәләне.

✓Башҡортостандың бер юлы ике мәҙәниәт хеҙмәткәренә Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин награда тапшырҙы. "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре" исеменә "Ғилем" нәшриәте - Башҡортостан Республикаһының Фәндәр академияһы филиалы директоры Фаил Тикеев лайыҡ булды. Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы профессоры Евгения Скуркоға "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре" исеме бирелде. Илдең иң яҡшы ижади хеҙмәткәрҙәрен бүләкләү тантанаһы Кремлдә үтте.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Марат Ғәлиуллин Орджоникидзе район хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнде. Ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов районды 15 йыл дауамында етәкләгән Мәхмүт Бикбулатовҡа рәхмәтен белдерҙе.

✓Республиканың 25 мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәре һәм биш ижади коллектив Башҡортостан Республикаһы Президенты грантына лайыҡ булды. Конкурс еңеүселәре араһында БР Композиторҙар союзы рәйесе Ләйлә Исмәғилева ла бар. 100 мең һум күләмендәге грант "Заһир Исмәғилевтың Йорт-музейын реставрациялау" проектын тормошҡа ашырыуға бүленгән. Грант ярҙамы шулай уҡ "Боронғо Өфө" музей-ҡурсаулығы директоры Гәүһәр Батталоваға "Өфө-II ҡаласығы" ҡомартҡы территорияһында табылған археологик табылдыҡтарҙан күргәҙмә һәм фотокүргәҙмә ойоштороуға бирелә.

✔ *Тәрбиәһеҙ малайҙар ҡош ояһын туҙҙырған кеүек туҙҙырҙылар бит ауылдарҙы. Ҡарт ағасты урынынан ҡуҙғатһаң, яңынан тамыр ебәрә алмай. Сит ауылға күсеп киткән тиҫтерҙәремдең береһе лә ҡалманы.*



*УЙЛЫҒА - УЙ*

**Милләт киләсәге, аҙмышы тураһында күп һөйләйбеҙ, борсолабыҙ, ҡайһы саҡ ошонан ары уҙа алмайбыҙ. Ҡайһы бер мәсьәләләрҙе "юҡ-бар" тип һанайбыҙ. Эй, ҡуйсы, ваҡланмайыҡ, тибеҙ. Әммә, уйлап ҡараһаң, милләткә ҡағылған мәсьәләләрҙә ваҡ нәмә юҡ. Быға күптән түгел булған ваҡиғанан һуң тағы бер тапҡыр инандым.**



# ҮҘЕБЕҘ БУЛЫП ҠАЛАЙЫҠ,

## туғандар бергә йыйылғанда булһа ла...

Ауылда гөрләп туй бара. Ә мин туйҙы алып барыусы ролендәмен. Һәр кем туйҙың матур йолаһын атҡара: йәштәргә өгөт-нәсихәт, теләктәр белдерелә, бүләктәр тапшырыла. Бына бер йәш ғаилә кейәү менән килешкә туй бүләге тапшырҙы, ҡотланы ла, "Тағы бер бүләгебеҙ - бейеү!" тип иғлан итте. Шул арала аппаратура артында ултырған егет лезгинка көйөн яңғыратты. Ҡунаҡ егет ҡулдарын йәйеп, грузинса бейергә тотондо. Ярайһы оҫта ғына бейене был, ҡунаҡтар араһында ара-тирә ҡул сабыусылар ҙа ишетелде. Бейеүҙән һуң тәнәфес иғлан иткәс, яныма бер олатай килеп баҫты ла: "Табынды матур алып бараһың, һылыу. Тик ҡара әле, ҡунаҡтар араһында грузиндар бармы? - тине. - Туй мәжлесен алып барырға ҡуйғандар икән, тимәк, һин бында һәр сығыш өсөн яуаплыһың. Был мәжлестең тәрбиәүи һабаҡтары ла бар бит. Ана, балалар күпме бында, йәштәр ҙә байтаҡ. Улар аңына, туйҙар барғанда мотлаҡ грузин бейеүен бейергә кәрәк икән, тигән уй һалынды бит былай булғас. Бында "Буранбай" "Сибай" көйҙәре яңғырарға, "Байыҡ", "Ҙаһиҙә"-ләр бейелергә тейеш! Йәнәшәбеҙҙә былай ҙа ситтәр ишәйҙе, теләйбеҙме-теләмәйбеҙме, йәштәребеҙ уларҙың кире йоғонтоһона бирелергә, уларҙың телен, мәҙәниәтен үҙләштерергә әҙер тора. Ана бит, егет кеше үҙенең бейеүен түгел, ә сит милләт бейеүен кинәнеп бейене. Шуға ла бына ошондай туғандар ғына йыйылған мәжлестәр үҙебеҙҙең рухта үтергә тейеш, тип иҫәпләйем мин..." - шулай тине лә, боролоп китеп барҙы олатайыбыҙ...

Олатай хаҡлы ине. Шуға ла хатаны төҙәтеү өсөн бейеүсе егет менән һөйләшеп алырға булдым. Ул: "Апай, минең башҡорт бейеү көйҙәре яҙылған дискым үҙем менән юҡ ине шул. Унан һуң, бейегәс-бейегәс, башҡорт милли кейемен кейеп бейергә кәрәк бит инде..."- тип аҡланды. Туй аҙағындараҡ ҡунаҡтар араһынан көтөүгән генә ике ағай теге егетте саҡырып сығарып, байтаҡ ҡына һөйләшеп торҙолар. Һуңынан егетебеҙ мәжлес барған залға инеп, башҡорт бейеүен бейене барыбер...

Ошо ваҡиға оҙаҡ ҡына күңелемдән китмәне. Дөрөҫ әйтте олатай, һеҙерәп әйтте: милләт мәсьәләһенә килгәндә, ваҡ нәмәләр булмай...

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА.**
**Ейәнсура районы.**

# КҮҢЕЛ ҺЫЙЫНЫР ТӨБӘК

**Күгәрсен районында Башҡорт Бөркөтө тигән гөрләп торған ауыл Никита Хрущев етәкселек иткән йылдарҙағы сәйәсәт һөҙөмтәһендә, ул ғына ла түгел, урындағы етәкселәрҙең ашығыс, уйламай-нитмәй хәл итеүҙәре арҡаһында күҙ асып йомған арала тарҡала башлай.**

"Беҙ китһәк, быуаттар буйы кеше күңеленә йыылыҡ һирпеп торған ауылдың үҙе лә, гәжәп матур исеме лә юҡҡа сығасаҡ, балаларыбыҙҙың күңел һыйыныр төбәге лә ҡалмаясаҡ. Китмәйек беҙ бынан, тип, бер туған һеңлем Венера, мин, Сәғит менән Мәрзиә Ҡотлобаевтар нигеҙебеҙҙе һыуытмай тороп ҡалдыҡ", - тип һөйләгәйне иҫән сағында ир уҙаманы, сикһеҙ илһөйәр Рәфҡәт ағай Хәйретдинов. Туҡһан йәштән уҙып киткәнсе, фани донъя менән хушлашҡансы тыуған төйәген ташламаны ул. Яраҡтан ҡатыны Хәзирә үҙенән алдараҡ яҡты донъяны ташлап киткәндән һуң да балалары янына китмәй, ошонда ҡалды. Нигеҙ урынын хәҙер хаҡлы ялға сыҡҡан балалары үҙ баларына күңел һыйыныр төйәк итеп тота.

"Тәрбиәһеҙ малайҙар ҡош ояһын туҙҙырған кеүек туҙҙырҙылар бит ауылдарҙы. Ҡарт ағасты урынынан ҡуҙғатһаң, яңынан тамыр ебәрә алмай. Сит ауылға күсеп киткән тиҫтерҙәремдең береһе лә ҡалманы. Мин ошо тыуған төйәгемдә Хәзирәмдән ҡалған яҡты хәтирәләр менән йәшәйем. Ә яңы ерҙә ниндәй хәтирә йәшәтһен өлкәнәйгәс? Тәбиғәт яраттыҡ икебеҙ ҙә. Умарта тоттоҡ. Ошо бәләкәй генә ҡорттарҙан өлгө алып йәшәнек. Уларға ҡарап һоҡлана торғайныҡ. Эшсәндәр, татыуҙар. Ошо өй урынын Хәзирәм һайланы. Ожмах булды был беҙҙең өсөн. Башҡорт Бөркөтө тигән ауыл кемгә ҡамасауланы икән? Бер генә лә "киләсәкһеҙ" тип әйтерлек урыны юҡ. Ул йылға, ул уңдырышлы ер, һәр ваҡыт еләҫ ел иҫеп тороуы үҙе генә ни тора! Ә ҡоштарҙың түгелеп-түгелеп һайрауы! Ауылдарҙы бөтөрөү - халҡыбыҙ өсөн оло юғалтыу. Кеше аҙмышын ғына түгел, халыҡ аҙмышын ботарлау ул". Аҡһаҡал Рәфҡәт ағайҙың ошо әрнеп һөйләгән һүҙҙәре һаман хәтерҙә һаҡлана. Ауылды ауыл итеп һаҡлай алмаһа ла, исемен юғалтмаҫлыҡ, тыуған төйәк, тип ҡайтып йөрөрлөк төбәк булып ҡалды барыбер Башҡорт Бөркөтө. Ундайҙарға киләсәк быуын рәхмәтле булыр.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

*БАШ ЙОРТТА*

# ШАТЛАНДЫРҘЫ ҺӘМ...

## хәүефкә лә һалды

**Өфөлә үткән быуаттың 70-80-се йылдарында эшләнем. Ләкин атай-әсәйҙе ҡарауыс кеше булмағас, ауылға ҡайтырға һәм шунда төпләнергә тура килде. Баш ҡалала кәмендә 15 йыл тирәһе булғаным юҡ ине, күптән түгел юл төштө. Өфөләге тормош хаҡында телевизор экраны аша ишетеп, гәзит биттәренән уҡып, хәбәрҙар булып торабыҙ, шулай ҙа бындағы үҙгәрештәргә иҫ китерлек.**

Мин күреп өйрәнгән бәләкәй ағас йорттар урынына күп ҡатлылары ҡалҡып сыҡҡан. Киң юлдарҙан тегеләй-былай елдергән машиналарҙың, ҡайҙалыр ашығыусы кешеләрҙең күплеге күҙгә ташлана. Элек урамда бер магазин булһа, хәҙер улары ла аҙым һайын. Мин эшләгән ваҡыттарҙа ашханалар һаны әҙ ине, хәҙер иһә уларының һаны ла бихисап булып киткән. Ғөмүмән, ҡала таный алмаҫлыҡ булып яҡшы яҡҡа үҙгәргән - был ҡыуаныслы.

Өфөгә килеп, тағы бер нәмәгә иғтибар иттем: ҡала урамдарында рәхәтләнеп үҙебеҙсә әңгәмәләшеп йөрөп ятыусылар күбәйгән. Был күренеш күңелгә май булып ятты. Танығыбыҙ булып үҙгәргән Салауат һәйкәле янындағы майҙанда балаларын саф һауаға алып сыҡҡан йәш атай-әсәйҙәр ҙә матур итеп башҡортса аралаша. Бына, исмаһам, Өфө Башҡортостандың баш ҡалаһына оҡшап ҡалған, йәмәғәт.

Ләкин күңелде ҡырған күренештәр ҙә юҡ түгел. Мәҫәлән, ҡала маршруттары автобустарының күбеһендә Урта Азиянан килеүселәр водитель булып эшләй икән. Йүнләп ҡаланы ла, юлды ла, телде лә белмәгән үзбәк, тажик һәм башҡа милләт вәкилдәре аҡса эшләү өсөн бөтә сараларҙы ла ҡулай, тип иҫәпләй, күрәһең. Уларҙың юл ҡағиҙәләренә төкөрөп ҡарауы бер ҡурҡыныс тыуҙырһа, пассажирҙар менән тупаҫ мөғәмәлә итеүҙәре икенсе йәһәттән хәүефкә һала. Бындай мөнәсәбәтте, минеңсә, урынында уҡ юҡҡа сығарып барырға кәрәк, сөнки өндәшмәгән һайын елкәгә менеп ултырырға тырышасаҡтар. Үҙҙәрен һыйындырған, эшләргә эш, ашарға аҙыҡ биргән илгә, халыҡҡа ихтирамлы булыуҙы талап итә белеү - беҙҙең бурысыбыҙ. Еңел тормоштан сығып китмәй кеше тыуған йортонан, ләкин ҡунаҡта саҡта үҙеңдең ҡағиҙәләреңде бер аҙға үҙгәртергә, хужалар менән иҫәпләшергә тура килә. Ә мин әлегә Өфөлә быны күрмәнем. Шуныһы һиҫкәндерә.

Бына шулай. Баш ҡалаға килеп, үҙгәрештәрҙе күреп, бер яҡтан, оло ҡыуаныс кисерҙем, ләкин күңелде ҡырған күренештәр ҙә осраны. Тик нисек кенә булмаһын, үҙебеҙҙең баш ҡала беҙгә ҡәҙерле һәм яҡын.

**Сәлих АҠМАНОВ.**
**Хәйбулла районы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔"Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһының ижади төркөмө төшөргән "Мин рәссам булдым" документаль фильмы "Беҙҙең заман геройы" социаль әһәмиәтле телетапшырыуҙар һәм телефильмдар фестиваленде беренсе урынға лайыҡ булды. Бөтә Рәсәй фестивале Пензала үтте. Таҫма "Билдәһеҙ геройҙар" номинацияһында билдәләнә. Ул Башҡортостанда профессиональ музыкаға нигеҙ һалыусыларҙың береһе - ғалим-фольклорсы, дирижер, Өфө сәнғәт училищеһының тәүге директоры Иван Салтыковҡа арналған. Фильмдың авторы - музыка белгесе Миләүшә Иҙрисова уны фольклорсының 120 йыллығына төшөрҙө.

✔Йомғаҡлау дәүләт аттестацияһын уңышлы тапшырған һәм бөтә предметтар буйынса бишлегә уҡыған дөйөм белем биреү мәктәптәренең сығарылыш уҡыусыларына яңынан "Уҡыуҙа өлгәшкән айырым уңыштары өсөн" миҙалы тапшырыла башлаясаҡ. Тейешле законға Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, мәктәптә яңы тамамлаясаҡ уҡыусылар ҙа шулай уҡ наградаға дәғүә итә ала. "Уҡыуҙа өлгәшкән айырым уңыштары өсөн" миҙалын улар 2014 йылдың 1 октябренә тиклем аласаҡ.

✔Башҡортостанда иртә яҙғы иген һәм ҡуҙаҡлы иген культураларын сәсеү эше тамамланған. Һуҙ бойҙай, һоло, арпа, борсаҡ, шулай уҡ техник культуралар - шәкәр сөгөлдөрө һәм көнбағыш тураһында бара. Һуң яҙғы (ҡара бойҙай һәм тары) һәм мал аҙығы культураларын (кукуруз, судан үләне, иген ҡатнашмаһы) сәсергә ҡала. БР Ауыл хужалығын консультацияләу үҙәге мәғлүмәттәренә ярашлы, бөгөнгә көнгә яҙғы культуралар 1,9 миллион гектар майҙанда (республика планының 95 проценты) сәселгән.

✔2016 йылда Өфөнөң Калинин районы Инорс-7 биҫтәһендә 155 урынлыҡ ике ҡатлы балалар баҡсаһы барлыҡҡа киләсәк. Генераль подрядсылыҡ билдәләү буйынса конкурс документтары дәүләт һатып алыуҙары сайтында баҫылған. Килешеүҙең башланғыс хаҡы - 84,9 миллион һум, проекты Өфө бюджетынан финансларға ҡуҙаллана. Төҙөлөштө 2016 йылдың 1 июленә тиклем тамамлау ниәтләнәләр.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Өфө ҡалаһында Иппотерапия буйынса ғилми-методик үҙәк ойоштороу мөмкинлеге лә ҡаралды. Йәғни Башҡортостан йәш быуындың сәләмәтлеге торошон яҡшыртыу буйынса алдынғы төбәктәрҙең береһе буласаҡ.*



*ТӨРЛӨҺӨНӨН*

## ҺЫБАЙ ЙӨРӨП... ДАУАЛАН

**Сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙың һәм үҫмерҙәрҙең социаль адаптацияһы һәм реабилитацияһының иң һөҙөмтәле ысулдарының береһе булып иппотерапия һанала.**

Ошоно күҙ уңында тотоп, 27-28 майҙа Иппотерапия үҙәге менән Мәскәүҙең, Санкт-Петербургтың Һыбай йөрөп дауаланыу һәм инвалидтарҙың ат спорты милли федерацияһы ҡыҙыҡһыныусы ведомстволар менән берлектә Волга буйы, Урал федераль округтарында иппотерапия ысулын үҫтереү мәсьәләләре буйынса төбәк-ара ғилми-ғәмәли конференция үткәрҙе. Шулай уҡ унда Өфө ҡалаһында Иппотерапия буйынса ғилми-методик үҙәк ойоштороу мөмкинлеге лә ҡаралды. Йәғни Башҡортостан йәш быуындың сәләмәтлеге торошон яҡшыртыу өсөн иппотерапевтик һәм фәнни методикаларҙы индереү буйынса алдынғы төбәктәрҙең береһе буласаҡ.

Сарала ҡатнашыусылар иппотерапия күнекмәләре уҙғарыуҙы ойоштороуҙың юридик яҡтары, ошо өлкәлә белгестәр әҙерләү, урында һәм төбәктәрҙә власть органдары менән хеҙмәттәшлек итеү мәсьәләләре буйынса фекер алышты. Шулай уҡ иппотерапиялағы инновациялар, спортсылар һәм аттар әҙерләү, ярыштар үткәреү мәсьәләләрен ҡараны, оҫталыҡ дәрестәре алды.

## ИҢ ЯҠШЫ СӘСКӘ ТҮТӘЛЕ...

**Матурлыҡ яратҡан кешенең күңелендә насар уй-ниәт булмай, тиҙәр. Ҡасан ғына бер танышым Һупайлы биҫтәһендәге йорт алдын матурлау өсөн ауылдан түмәрҙәр, таштар килтерәм, икенсе көнөнә уҡ "айыу майы" һөртәләр, тип зарланғайны. Хәҙер, киреһенсә, милекселәр үҙҙәренең йорт алдын матурларға, унда бәләкәй генә ожмах баҡсаһы булдырырға тырыша.**

Ер ҡарҙан асылыу менән ойошторолған өмәләрҙән һуң баш ҡаланың бик күп ихаталары йәшеллеккә күмелде, ә инде ошо матурлыҡты үҙ ҡулдары менән тыуҙырыусылар, күрше ихатаға "разведка" яһап, "беҙҙеке барыбер матурыраҡ", тип, эстән генә ғорурланып та ҡуйылар, моғайын.

Халыҡтың йорт ихаталарын тәртиптә һәм зауыҡта тотоуын әүҙемләштереү маҡсатында "Өфө ҡалаһы торлаҡ хужалығы идаралығы" МБУ-һы райондарҙың торлаҡ хужалыҡтары идаралыҡтары менән берлектә 1 июлдән иң яҡшы клумба һәм өй алды баҡсаһына, шулай уҡ иң матур балкон һәм лоджияға конкурс иғлан итә. Унда ижади берлектәр ҙә, айырым кешеләр ҙә ҡатнаша ала. Ике номинация буйынса өс призлы урын билдәләнәсәк. Әммә, ойоштороусылар әйтеүенсә, бер генә ҡатнашыусы ла иғтибарҙан ситтә ҡалмаясаҡ. Конкурсҡа 22 августа йомғаҡ яһаласаҡ. Ғаризаларҙы Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 165/1 адресы буйынса 2-13-сө бүлмәгә йәки nasibullina@ugh.ufanet.ru электрон почтаһына 30 июлгә тиклем ебәрергә кәрәк. Унда исем-шәриф, йәшәү урынының адресы һәм бәйләнеш телефонының номеры күрһәтелеүе зарур. Белешмәләр өсөн телефон: 233-66-33.

*БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ*

# АРАЛАШЫУ ЗАРУРЛЫҒЫ БАР



**Май уртаһында баш ҡалала VI Бөтә Рәсәй "Урал-Алтай: быуаттар аша киләсәккә" тип аталған ғилми конференция булып үтте. Быйыл сара "Сармат археологияһы һәм тарихы проблемалары" халыҡ-ара конференцияһы менән бергә ойошторолдо. Ике йылға бер үткәрелгән "Урал-Алтай" ғилми форумы 2003 йылдан алып ойоштороla. Маҡсаты - төрлө йүнәлештәр буйынса шөғөлләнгән төркиәтсе ғалимдарҙың иғтибарын төрки халыҡтары телдәрен, әҙәбиәтен, фольклорын, тарихын, этнографияһын өйрәнеүгә йүнәлтеү, үҫеш юлдарын эҙләү. Ә "Сармат археологияһы һәм тарихы проблемалары" халыҡ-ара фәнни конференцияһы 1994 йылдан башлап, өс йылға бер үткәрелә. Башҡортостанда археолог-сарматсылар беренсе тапҡыр йыйылды. Сараға йыйылған ҡунаҡтар менән бер-ике ауыҙ һүҙ һөйләшеп алдыҡ.**

**Имаш ГАДЖИЕВ, Әзербайжан республикаһы:** Башҡортостанға икенсе тапҡыр килеүем. Былтыр Ғайса Батырғәрәй улы Хөсәйеновтың юбилейына арналған ошо уҡ конференцияла ҡатнашҡайным. Өфөгә сәҡырыуҙары, йылы ҡаршы алыуҙары өсөн рәхмәтемде белдерәм. Тәү килеүемдән үк Башҡортостан хаҡында яҡшы тәьсораттар ғына ҡалды. Ни тиһәң дә, ҡасандыр бер дәүләттә йәшәгәнебеҙҙе лә оноторға ярамай. Ул ваҡытта ниндәйҙер кимәлдә булһа ла бер-беребеҙҙең мәҙәниәтен, тарихын өйрәнә инек. Бигерәк тә туғандаш төрки телле халыҡтар менән тығыҙ аралаша инек. Бөгөн был өлкәлә проблемалар күҙәтелә, әлбиттә, аралашыуҙар һирәгәйҙе, тип әйтмәксемен.

Был килеүемдә лә республикағыҙҙың билдәле урындары буйлап экскурсиялар ойошторолдо. Бер ауылда (Әбйәлил районы Рәхмәт ауылы - **ред.**) мәсет асыуҙа ҡатнаштыҡ. Халыҡ менән аралашҡанда, урындағы йолаларҙы күҙәткәндә, "Беҙ ошо халыҡ менән туғандашбыҙ", тигән уйҙар күңелдә йылытты. Уртаҡ тамырҙарыбыҙҙы тағы ла нығыраҡ өйрәнергә кәрәк, тигән уйҙар ялмап алды. Ни тиһәң дә, совет осоронда беҙ бер-беребеҙҙе бер яҡлыраҡ ҡына өйрәнә инек. Ә хәҙер бөтөнләй башҡа аспекттарға иғтибар бүленә һәм улар туғанлыҡ ептәрен нығытыр, тип ышаным килә.

Тағы шул. Исмәт Бинәрҙең Төркиәлә башҡорт теле дәреслеге яҙып, шуның буйынса студенттарҙы укытыуы, һис шикһеҙ, яҡшы күренеш. Әзербайжанда ла башҡорт телен уҡытыу мәсьәләһен күтәрергә ваҡыт еткәндер. Был үҙ-ара бәйләнеште, бер-беребеҙҙе өйрәнеү даирәһен киңәйтер ине. Сөнки тел аша мәҙәниәт тә, йолалар ҙа өйрәнелә. Әзербайжандан әлеге конференцияға тел белгестәре килгәне юҡ. Киләсәктә ундай сараға мотлаҡ тел белгестәрен дә алып килергә кәрәк, тип уйлайым.

**Леонид ЯБЛОНСКИЙ, тарих фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһы археология институты "Сармат археологияһы һәм тарихы" фәнни конференцияһының халыҡ-ара ойоштороу комитеты рәйесе:** Сармат белгестәренең ғилми конференцияһын үткәреү урыны итеп Өфөнөң һайланыуы юҡҡа түгел. Башҡортостан археологтары элек-электән үҙҙәренең эштәре менән абруй ҡаҙанған кешеләр. Улар совет осоронда ла, бөгөнгө көндә лә археология фәнен үҫтереүгә теоретик яҡтан да, практик яҡтан да күп һыңғай күренештәр индерҙе һәм индереүен дауам итә. Уларҙың асыштары Рәсәй, донъя археологияһында мөһим урын алып тора.

Сарматтар тарихы буйынса конференцияға килгәндә, ул ҙур фәнни әһәмиәткә эйә. Был археолог-сарматсыларҙың төп форумы, донъяның төрлө өлөштәренән килгән ғалимдарҙың докладтары, ойошторолған дискуссиялар фәндең, йүнәлештең артабан үҫеүенә яҡшы этәргес буласаҡ. Сарматтар Евразия далаларында оҙаҡ йылдар йәшәгән күсмә халыҡ. Уларҙың мәҙәниәте 1500 йылды үҙ эсенә ала. Шулай уҡ уларҙың башҡа халыҡтарға сәйәси йоғонтолары ла көслө булған. Башҡортостандың археология музейында ла ошо мәҙәниәткә ҡараған һәм Башҡортостан ғалимдары тарафынан табылған сармат боландар һаҡлана бит. Юғары оҫталыҡ менән бер нисә быуат элек башҡарылған был эштәр Эрмитаж музейы күргәҙмәләре сигендә бик күп илдәрҙә урап сыҡты һәм бөгөнгө көндә лайыҡлы рәүештә кешелектең мәҙәни мираҫының бер өлөшөн тәшкил итә.

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ЭШ БОҘҺА - ҠЫУЫРҒА!

Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең селектор кәңәшмәһендә Премьер-министр Дмитрий Медведев Берҙәм дәүләт имтихандары ҡағиҙәләрен боҙған уҡытыусыларҙы эштән бушатырға тәҡдим итте.

- Әлбиттә, БДИ тәртибен боҙоусыларҙың бөтәһе лә яуап тоторға тейеш,- тине ул.- Әммә бындай хәлдәр мәктәп етәкселеге һәм айырыуса уҡытыусылар ҡатнашлығында килеп тыуа икән, был икеләтә хәүефле һәм түҙеп торғоһоҙ. Бындай хәлдә вазифа яуаплылығын тупаҫ боҙоу тип баһаларға кәрәк, тип уйлайым. Ҡыҫҡаһы, бындай хәлгә әләккәндәрҙе эштән ҡыуырға кәрәк...

Әйткәндәй, былтырғы яңылыштарҙа исемдәре сыҡҡандарҙы быйылғы имтихандарға индермәйәсәктәр. Унан һуң, хәүефһеҙлек саралары ла бик ҡаты: 35 мең камера, онлайн-күҙәтеү, бөтөн имтихан пункттарында ла инспекторҙар. Имтихан биремдәре һалынған пакеттарҙы ла хатта махсус элемтә каналдары буйынса килтерәсәктәр.

Кәңәшмә барышында тағы бер тәҡдим ҡаралды: уҡыусыларға имтихандарҙы йыл дауамында тапшырыу мөмкинлеге биреү. Мәҫәлән, улар география һәм башҡа ҡайһы бер предметтарҙы X класта тамамлайҙар һәм киләһе йылды көтөп тормаҫтан, был фәндән имтиханды тапшырып та ҡуя алһындар ине, тигән тәҡдим буйынса Премьер уйлашырға вәғәҙә бирҙе.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда пенсионерҙарҙың иҫәбе 1 апрелгә ҡарата 1111,1 мең кеше тәшкил итә, ул 2013 йылдың ошо уҡ осоронан 1,6 процентҡа күберәк. Шул уҡ ваҡытта уртаса пенсия 9 процентҡа - айына 9 416,2 һумдан 10264,2 һумға тиклем артҡан. Республиканың бөтә пенсионерҙарынан 91,3 проценты, йәғни 1013,9 мең кеше, хеҙмәт пенсияһы ала. Социаль пенсияның уртаса күләме айына 7487,2 һум тәшкил итә. Уны республиканың 93,1 мең пенсионеры ала.

✓Өфө - Симферополь даими рейсын RedWings авиакомпанияһы 8 июндә аса. 8 июнгә Өфөнән Симферополгә ташламалы билеттар (дөйөм хаҡы 3025 һум) һатып бөтөлгән, тип хәбәр иттеләр "Өфө" халыҡ-ара аэропортында. Самолет аҙнаһына ике тапҡыр - йома һәм йәкшәмбе осасаҡ.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһы "Ҙур химия" IV Халыҡ-ара форумы ҡатнашыусыларын ҡабул итте. Форумда белгестәр ватан нефть һәм газ химияһы тармағын үҫтереү мәсьәләләрен тикшерҙе. Пленар ултырыш Рәсәй нефть һәм газ тармағы продукцияларының эске баҙарына арналды.

✓12 июндә Башҡорт дәүләт филармонияһы артистары Ҡырым һабантуйында ҡатнашасаҡ. Билдәле артистар, "Далан" төркөмө солистары Артур Туктағолов һәм Миңзифа Искужина, Редик Сәғитов, ҡурайсы Илнур Хибәтуллин, йырсылар Марсель Ҡотоев, Римма Амангилдина үҙ сығыштары менән байрам программаһын биҙәйәсәк.

✓Рәсәйҙең пластик хирургия белгестәре Башҡортостанда "Йылмайыу" операцияһы" тигән хәйриә акция башланы. Проект сиктәрендә Республика балалар клиник дауаханаһында табиптар республика район һәм ҡалаларында йәшәгән яңаҡ-йөҙөндә етешһеҙлектәр булған 50-нән ашыу балаға операция яһарға ниәтләй. Был беҙҙең төбәк өсөн бик кәрәкле проект, йыл һайын республикала ауыҙ һәм йөҙөндә етешһеҙлектәр менән 80 самаһы бала тыуа. Бөгөнгө көнгә диспансерҙа иҫәптә ошондай 2000 самаһы бала тора.

✓Балалар һәм үҫмерҙәр фильмдарының "Аҡбуҙат" I район кинофестивале 27 июндә Ейәнсура районының Иҫәнгол ауылында үтәсәк. Фестивалдең маҡсаты - кино сәнғәте ярҙамында тамашасылар иғтибарын социаль һәм дини проблемаларға йәлеп итеү. Конкурс программаһында Ейәнсура районы белем биреү учреждениелары ҡатнаша ала. Конкурстан тыш программала эштәр бөтә граждандарҙан да ҡабул ителә.

***✓ Кәрәк булғанда, ашығыс психологик һәм башҡа ярҙам күрһәтеләсәк. Балалар өсөн ышаныс телефонының төп бурысы - балаларға ҡарата көс ҡулланыуҙы, йәберләүҙе иҫкәртеү һәм уларҙың хоҡуҡтарын, законлы мәнфәғәттәрен яҡлау.***



*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*









# "ҺУҢҒЫ ҠЫҢҒЫРАУ"...

## мәктәп менән хушлаштырҙы

**Башҡортостанда тәү башлап мәктәп ишеген үрелеп асыуға ун бер йыл тулып, оло тормош юлына аяҡ баҫырға тороусы 23 меңдән ашыу мәктәп уҡыусыһы 24 май көндө һуңғы тапҡыр мәктәп ҡыңғырауы сыңын тыңланы.**

Баш ҡалабыҙ мәктәптәрендә лә 11-се синыф уҡыусыларын тәбрикләү тантаналары гөрләп уҙҙы. Мәғлүмәттәр буйынса, Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһын 46 сығарылыш уҡыусыһы тамамлаған. Улар араһында спорт буйынса Рәсәй кимәлендә үткәрелгән ярыш чемпиондары, төрлө конкурс, олимпиада еңеүселәре бар. М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы быйыл бөтәһе 40 үҫмергә урта белем биреп сығара. З. Биишева исемендәге 140-сы гимназияны быйыл 20 уҡыусы, ә бына Республика иҡтисад лицей-интернатын бөтәһе 103 бала тамамлай, артабан улар техник һәм социаль-иҡтисади йүнәлештәр буйынса белемен камиллаштырырға ниәтләй.

Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында һуңғы ҡыңғырау 156 уҡыусы өсөн яңғыраны. Гимназия директоры Әлфир Ғайсин әйтеүенсә, быйыл 70 йыллыҡ юбилейын билдәләргә йыйынған гимназия береһенән-береһе әүҙемерәк, дәртле, белемле һигеҙ сығарылыш класын Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләй. Алдан уҡ киләсәктәрен күҙаллап, физика-математика, медицина, политология, гуманитар йүнәлештәр буйынса төплө белем алыусы балаларҙың артабан үҙҙәре теләгән һөнәргә эйә буласағы шик тыуҙырмай. "Һуңғы ҡыңғырау" тантанаһы халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың "Туған тел" шиғырын яттан һөйләү менән тамамланды.

Сара уҡыусылар өсөн генә түгел, уларҙың ата-әсәләре өсөн дә тулҡынландырғыс минуттар бүләк итте. Улын мәктәпте тамамлауы менән тәбрикләргә килгән Гөлназ Фазлетдинова: "Учалы районы яҡын ара булмаһа ла, улымды ошо гимназия-интернатҡа уҡырға биреп, һис яңылышмағанмын", - тип үҙ фекере менән бүлеште. Белем усағында үткәрелгән тантананан кемдер иҫтәлектәр алып, кемдер хистәрен яңыртып ҡайтты.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

Быйыл бөтәһе 750 мең кеше БДИ тапшыра, шуларҙың 700-ләбе - мәктәпте быйыл тамамлаусылар. Ҡырым мәктәптәре уҡыусылары иһә БДИ-мы, әллә ҡәҙимге имтихандармы, үҙҙәре һайлаясаҡ.

## БИЛЕТҠА ХАҠ КӘМЕРМЕ?

Рәсәй Хөкүмәте авиабилеттарға хаҡты бер аҙ кәметеү сараһын тапты, тип хәбәр итә Үҙәк гәзиттәр. Хөкүмәт авиакомпанияларға багаж өсөн түләүҙә айырым тариф булдырырға тәҡдим итмәксе. Әлеге ваҡытта багаж ташыу авиабилеттар хаҡына индерелгән, сығымдар шуның менән бәйле, ләкин күп пассажирҙар йыш ҡына багажһыҙ оса - артыҡ түләүҙәр шунлыҡтан килеп сыға ла инде. Шул уҡ ваҡытта пассажирҙар элеккесә 10 кг-ға тиклем ҡул йөгөн бушлай алып йөрөй ала.

Бынан тыш, Хөкүмәттә бюджет мәсьәләләре лә ҡаралды. 2013 йыл бюджеты үтәлешенең төп һөҙөмтәһе тип макроиҡтисад тотороҡлолоғо һәм бөтә социаль йөкләмәләрҙең дә башҡарылып сығыуы аталды. 2013 йылда эске тулайым продукт күләме 2012 йыл менән сағыштырғанда 1,3 процентҡа артты һәм 66,8 триллион һум тәшкил итте. Шул уҡ ваҡытта 2013 йылда табыш тәүге фаразлауҙарҙан артып китте һәм 13 триллион һум тәшкил итте.

**Фирүзә ИШБИРҘИНА әҙерләне.**

*ИҒТИБАР!*

## ҮҪМЕРҘӘР ӨСӨН ЫШАНЫС ТЕЛЕФОНЫ

**Республикала "Полиция балалар һағында" тип исемләнгән Бөтә Рәсәй акцияһы старт алды. Сара сиктәрендә балалар өсөн ышаныс телефоны булдырылған. 10-дан 16 сәғәткә тиклем 279-49-00 телефоны буйынса шылтыратып, үҫмерҙәр һәм ата-әсәләр үҙҙәрен борсоған мәсьәләләр менән уртаҡлаша ала.**

Республика Эске эштәр министрлығының балиғ булмағандар эше буйынса бүлексә хеҙмәткәрҙәре, балиғ булмаған хоҡуҡ боҙоусыларҙы ваҡытлыса тотоу үҙәге психологтары, белем биреү һәм йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре ата-әсәләр һәм балалар, ғаилә мөнәсәбәттәре буйынса хоҡуҡи һорауҙарға яуап бирәсәк. Кәрәк булғанда, ашығыс психологик һәм башҡа ярҙам күрһәтеләсәк. Балалар өсөн ышаныс телефонының төп бурысы - балаларға ҡарата көс ҡулланыуҙы, йәберләүҙе иҫкәртеү һәм уларҙың хоҡуҡтарын, законлы мәнфәғәттәрен яҡлау.

## БЕЛЕШМӘ АЛЫУ ЫСУЛЫ

**Хөкөмгә тарттырылыуҙың булыуы (булмауы) һәм енәйәт эше ҡуҙғатылыуы (енәйәт эшенең туҡтатылыуы) хаҡында белешмәне алыу өсөн хәҙер www.gosuslugi.ru электрон адресы буйынса дәүләт хеҙмәттәре Берҙәм порталына ғариза ебәрергә була.**

Бының өсөн дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр Берҙәм порталында "Шәхси кабинет" булдырырға кәрәк. Теркәү үткәндән һуң бер аҙна эсендә почта аша заказлы хат менән "Шәхси кабинет"ҡа инеү өсөн "Активация коды" ебәрелә. Кодты шулай уҡ Өфө ҡалаһы, Яңы күпер урамы, 8-се йортта урынлашҡан "Ростелеком"да ла алырға була. Был осраҡта шәхесте раҫлаусы документты (паспорт) һәм Пенсия фондының страховка таныҡлығын (СНИЛС) күрһәтеү мөһим. Электрон почта аша ебәрелгән ғаризалар беренсе сиратта ҡараласаҡ.

Шулай уҡ белешмә алыу өсөн ғаризаны Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 7-се йортҡа шәхси мөрәжәғәт итеп тә бирергә була. Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығының Йәмәғәт ҡабул итеү бүлмәһе дүшәмбе - йома көндәре сәғәт 12.00-нән 14.00-гә тиклем, йәкшәмбе көнө сәғәт 10.00-дан 12.00-гә тиклем эшләй. Ял көнө - шәмбе. Яуап биреү ваҡыты - 30 көн. Белешмәләр өсөн телефон (347) 279-42-80, (347) 279-41-51.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Инсульт

❖ 1 балғалаҡ киптерелгән пион (корни пиона уклоняющегося) тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. 1 сәғәт йылы урында төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 4-5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Йәки 1 балғалаҡ тамырҙы 300 мл араҡыла 7 көн төнәтеп, көнөнә 3 тапҡыр 25-әр тамсы ҡабул итергә.

❖ 1 ҡалаҡ ваҡланған сөйәл үләненә (чистотел большой) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 15 минут төнәтергә. Һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы - 2-3 аҙна.

❖ Уртаса ҙурлыҡтағы 2 лимон менән әфлисунды урталай ҡырҡып, һөйәктәрен алырға, ит турағыстан үткәрергә. Килеп сыҡҡан массаға 2 ҡалаҡ бал өҫтәргә. 1 тәүлек бүлмә температураһында быяла банкала торорға, һуңынан һыуытҡысҡа ҡуйырға. Көнөнә 2-3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ашарға.

❖ 1 ҡалаҡ ылыҫ энәләренә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Ярты лимондың ҡабығын әрсеп, турап, алдан әҙерләнгән 1 стакан ылыҫ төнәтмәһен ҡойорға. 2-3 ай буйына ас ҡарынға эсергә. 1 сәғәт ашамаҫҡа.

❖ Дөрөҫ итеп әҙерләнгән йәшел сәй инсульт кисереүселәргә бик файҙалы. Тик йәшел сәй эскән саҡта ҡан баҫымын күҙәтеп тороу зарур.

❖ Боронғолар инсульт мәлендә тиҙ ярҙам ысулы итеп башҡа боҙло һауыт һалған. Тәндең ҡайһы яғын фалиж һуға, боҙло һауытты баштың уға ҡапма-ҡаршы яғына ҡуйырға кәрәк.

❖ Тәндең фалиж һуҡҡан өлөштәрен көнөнә бер нисә тапҡыр майлап торалар. Бының өсөн 1 өлөш спиртҡа 2 өлөш үҫемлек майы ҡулланыла. Был маҡсатта эфир ҡулланырға була, тик ул тиҙ тоҡаныусан икәнен онотмағыҙ.

❖ 30 грамм лавр япрағын ваҡлап, 1 стакан үҫемлек майы ҡойорға. Йылы урында 2 аҙна тоторға, көн һайын болғатып торорға. Һөҙөргә, ҡайнау хәленә килтерергә. Көн һайын фалиж һуҡҡан урынға һөртөргә.

❖ 6 өлөш лавр япрағы онтағы, артыш (йәки аҡ шыршы, ҡарағай, шыршы) энәләре, 12 өлөш аҡ майҙы ҡушып, мазь яһарға. Фалиж һуҡҡан ерҙәргә көнөнә 2 тапҡыр һөртөргә.

✓ *Блогерҙар өсөн ҡуйылған талапты боҙған осраҡта граждандарға - 10 меңдән 30 меңгәсә, ойошма-предприятиеларға 50 меңдән 300 меңгә тиклем штраф һалынасаҡ.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# КӨНКҮРЕШ ЙОЛАЛАРЫ

**Малды көтөүгә ҡыуғас, йәй иртәнге сәйгә табын сәғәт 6-7-ләр тирәһендә ябылған. Хәлле ғаиләләрҙә иртәнге сәйҙе яйлап, самауырҙы ике-өс тапҡыр яңыртып эскәндәр. Башҡорттарҙың көнкүрешен өйрәнгән этнографтар билдәләүенсә, "етерлек кимәлдә ит, ҡымыҙ, һөт, сәй, шәкәр һәм икмәк булһа, башҡорт тормоштан ҡәнәғәт, улар өсөн артыҡ нәмә кәрәкмәй".**

Иртәнге сәйгә һөттә бешкән майлы бутҡа йәки һөтлө аш, бешерелгән йомортҡа, эремсек, май, ҡаймаҡ, баллы сәй ҡуйғандар. Иртән тиҙ генә ҡоймаҡ ҡойоп та ебәргәндәр. Урындыҡта йәки иҙәнгә түшәлгән балаҫ өҫтөндә ултырып ашағандар. Бер аяҡты тубыҡтан бөкләп, йәки ике тубыҡҡа таянып ултырыу киң таралған. Ирҙәр "төрөктәрсә", аяҡты салып ултыра алған. Ҡатын-ҡыҙҙың бары тик 55-60 йәште үткәндәре генә былай ултыра алған, шулай ҙа аяҡтарҙы был рәүешле салып ризыҡланыу гонаһ, тип ҡабул ителгән. Сүкәйеп ултырып, аяҡ өҫтө тороп, ятып ашау тыйылған. Уңайлылыҡ өсөн яҫтыҡтар ҡулланылған, улар тәү сиратта оло кешеләргә, ҡунаҡтарға тәғәйенләнгән. Ултыраҡ тормошҡа күсеү менән яйлап өҫтәл артында ашауға күскәндәр, был саҡта ултырғыста ултырыусының аяҡ табандары иҙәнгә тейеп торорға тейеш булған. Уртала ғаилә башлығы ултырған, уның эргәһенән ҡатыны, балалар урын алған. Ашар алдынан ашъяулыҡ түшәлгән, батмусҡа самауырҙы индереп ултырҡандар.

Атай кешенең "Бисмилла!" тип әйтеүенән һуң ғына ашай башлағандар. Ашамлыҡтарҙы, шул иҫәптән, икмәкте уң ҡул менән алғандар. Өлкән кешеләрҙең ризалығынан тыш табындан тороп китергә, ашъяулыҡты аша атларға, ҡабаланып ашарға ярамаған. Йорт хужаһы ризыҡты үҙе бүлеп биргән. Үҙ өлөшөн тәүҙә - ирҙәр, һуңынан ҡатындар һәм балалар алған. Аш-һыуҙы ҡатын-ҡыҙ әҙерләһә лә, икмәкте ир кеше телгән, итте өлөштәргә бүлгән. Был ризыҡҡа ихтирам йөҙөнән эшләнгән. Аш һалыуҙы, сәй яһауҙы ҡатын-ҡыҙ башҡарған, әммә сәйгә һөттө хужа үҙе һалған. Әгәр ҙә табында ир кеше юҡ икән, был йоланы оло йәштәге ҡатын-ҡыҙ үтәгән.

Эремсек, май, ҡаймаҡ, талҡан, бал һәм башҡа ризыҡтарҙы уртаҡ һауытҡа һалғандар, һәр кем үҙенә күпме кәрәк, шулай алып ашаған. Ит ризыҡтары, һалма ла дөйөм һауытта бирелгән. Бутҡа, ашты ҡалаҡ менән ашаһалар, итте мотлаҡ ҡул менән тотоп ашау дөрөҫ иҫәпләнгән. Шул уҡ ваҡытта, иттең иң тәмле урындарын түгел, ә алдына эләккән киҫәкте алып ашарға тейеш булғандар. Ҡоймаҡ ҡул менән ашалған, һурпаны ҙур булмаған сеүәтәгә ҡойоп биргәндәр.

XIX быуатта сәй эсеү табындары киң таралған була. "Башҡорт йылы кейемһеҙ, икмәкһеҙ, ондан яһалған шыйыҡ өйрә эсеп, уңайлыҡтары булмаған шарттарҙа йәшәй ала, әммә сәй эсмәйенсә тора алмай", - тип билдәләйҙәр ул ваҡыттағы тикшеренеүселәр. Хәлле башҡорттар сәйҙе көнөнә ун тапҡыр тирәһе эскән. Сәйҙе ҡаҙанда ҡайнатып, кәсәләргә һәм сынаяҡтарға ҡойоп эскәндәр. Сауҙа мөнәсәбәттәре үҫешеү менән, еҙ самауырҙар, сәйгүндәр, фарфор һауыт-һаба барлыҡҡа килгән. Әгәр бөртөклө сәй булмаһа, һөтләп ҡайнар һыу, үлән сәйҙәре эскәндәр. Йыйылған ҡунаҡтарға ихтирам йөҙөнән һәм был татлы минуттарҙы һуҙыу ниәтенән сәйҙе сынаяҡты тултырмайынса яһағандар. Сынаяҡты түңкәреп ҡуйыу туйыу билдәһе булған. Аҙаҡтан күмәкләп, доға уҡып ҡуйғандар.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

КӨНАУАЗ

# БЛОГЕРҘАРҒА КӨН БӨТӘМЕ,

## әллә уларға ла тыйыуҙар кәрәкме?



**РФ Дәүләт Думаһы блогерҙар тураһында закон ҡабул итте. Ул терроризмға ҡаршы закондар пакетына инә һәм интернетта контролде ҡәтғиләштереүҙе күҙаллай.**

Законға ярашлы, тәү сиратта, эҙләү системалары, блогтар, социаль селтәрҙәр, форумдар, мәғлүмәт таратыусы һәм уларҙан файҙаланыусыларға ирекле рәүештә үҙ фекерен белдереп комментарийҙар ҡалдырыу мөмкинлеге биреүсе башҡа ресурстар үҙенең эшмәкәрлеге башланыуын Роскомнадзорға белдерергә тейеш була. Бынан тыш, улар РФ территорияһында алты ай дауамында "Интернет селтәрен файҙаланыусыларҙан мәғлүмәт алыу, уны таратыу, тауыш яҙылған мәғлүмәтте алыу йәки эшкәртеү, яҙма текст, һынлы, тауышлы йәки башҡа электрон мәғлүмәт алыу һәм файҙаланыусылар тураһында мәғлүмәтте" һаҡларға тейеш.

Тәүлегенә өс мең кеше уҡыған блогтарҙың хужаларына ла закон Роскомнадзорҙа теркәлеү үтеүҙе йөкмәтә. Уларға ла әлеге ваҡытта киң мәғлүмәт сараларына һалынған сикләүҙәргә буйһоноу мәжбүри: блогҡа ҡуйылған мәғлүмәттең дөрөҫлөгө тикшерелергә, граждандарҙың шәхси тормошо хаҡындағы мәғлүмәт, экстремистик һәм порнографик материалдар таратылмаҫҡа, шулай уҡ һүгенеү һүҙҙәре булған материалдар урынлаштырылмаҫҡа тейеш. Улар шулай уҡ һайлау алды агитацияһы ҡағиҙәләрен үтәргә, ҡулланыусылар өсөн йәш сикләүен күрһәтергә бурыслы. Бынан тыш, блогерҙарҙың исем-шәрифе, электрон адресы ҡуйылыуы зарур. Блогерҙың шәхесен асыҡлау мөмкин булмағанда, Роскомнадзор хостинг провайдерына кәрәкле мәғлүмәттәрҙе талап итеп белдереү ҡағыҙы ебәрәсәк.

Блогерҙар өсөн ҡуйылған талапты боҙған осраҡта граждандарға - 10 меңдән 30 меңгәсә, ойошма-предприятиеларға 50 меңдән 300 меңгә тиклем штраф һалынасаҡ. Бер йыл эсендә ҡағиҙә боҙоу ҡабатлана икән, граждандарға 30 меңдән 50 меңгә тиклем, юридик шәхестәргә 300 меңдән 500 меңгәсә штраф һалыу йәки эшмәкәрлектәрен 30 көнгә туҡтатыу ҡаралған.

"Ғәҙел Рәсәй" фракцияһы был документты проект сағында уҡ тәнҡитләп сыҡҡайны. "Блогер - үҙенең дуҫтары менән аралашыусы кеше. Бындай ысул менән улар тарафынан дөрөҫ булмаған мәғлүмәт таратыуға ҡаршы көрәшеү мөмкин түгел. Бының өсөн шәхси кешеләргә ҡағылған закондар бар", - тигәйне фракция рәйесенең беренсе урынбаҫары Михаил Емельянов. Төптән уйлап ҡарағанда, шул уҡ терроризмға ҡаршы булған закондарҙағы пункттарҙы ла уны боҙоусыларға, был осраҡта шул уҡ блогерҙарға ҡарата ла ҡулланып булмаймы ни?

Шулай уҡ был яңылыҡты РФ Президенты ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары буйынса совет рәйесе Михаил Федотов та тәнҡитләне. Уның фекеренсә, документ ғәмәлдәге "Киң мәғлүмәт саралары тураһында"ғы законға ҡаршы килә. Эксперттар ҙа законды тәнҡитләп, унда ҡаралған нормаларҙың ғәмәлдәге закондар менән көйләнеүен, ә блогерҙар тураһында айырым закон ҡабул итеү оҡшамаған кешеләрҙе аҡылға ултыртыу өсөн кәрәк булыуы ихтималлығын белдергәйне.

Ирекһеҙҙән шундай һорау тыуа: дәүләт киң мәғлүмәт сараларына монополияға эйә була ала, ә бына интернет киңлегендә быны эшләү мөмкинме икән? Сөнки тәжрибәле блогерҙар күптән инде сит ил хостингтары аша эш итә. Ә улар Рәсәй закондарына буйһонмай. Эйе, Европа менән ниндәйҙер килешеү төҙөргә мөмкин, ләкин был эш тә сираттағы санкция кәртәһенә барып төртөлмәҫ, тип әйтеүе ҡыйын. Был осраҡта бары тик сит ил хостингтары аша эш иткән, әммә Рәсәй гражданы булып ҡалған блогерҙар өсөн быға тиклем булған закондарҙы ҡулланыу урынлыраҡ булмаҫ инеме икән?

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ, "Ағиҙел" журналының яуаплы секретары, башҡорт блогеры:** 1 августан көсөнә инәсәк "Блогерҙар тураһында" законды, башҡортса әйткәндә, "алдан кәртәләп ҡуйыу" тип аңларға кәрәк. Әлбиттә, бөгөн тотош Башҡортостанда ла көнөнә 3 мең кеше инеп ҡарай торған блог йә сайт табып булмай. Закондың шарты буйынса тик шуларға ҡағыла махсус органдарҙың күҙәтеүенә эләгеү. Икенсе яҡтан ҡарағанда, был шарттың үтәлешен тикшереү ҙә үтә сетерекле мәсьәлә. Әйтәйек, мин үҙемдең сайтыма һәм блогыма үҙем дә көн һайын инеп сығырға өлгөрмәйем әле. Тимәк, мин унда кисә нисә кеше инеп сыҡҡанлығын белмәүем дә ихтимал. Был бик хәүефле лә. Мәҫәлән, һайлау ваҡытында, йә шундай мөһим сара осоронда ул блогҡа бит ул өс мең кеше инеүен бик еңел ойошторорға мөмкин. Законға ярашлы, унда бер компьютерҙан бер тапҡыр ғына инеү түгел, ә сайтты ҡарап сығыусылар ғына иҫәпкә алына. Ана шунан һуң үҙең дә белмәҫтән ошо законды боҙоусы булып сығаһың һәм эҙәрлекләүҙәргә эләгәһең дә ҡуяһың. Әле лә "В контакте" биттәрендә улайтып "тауыш йыйыуҙар" аҙым һайын - "ошоно ҡара әле" тип ссылка ғына килә лә, кеше ҡыҙыҡ өсөн булһа ла кереп ҡарай....

Был закон бик ҡатмарлы һәм әллә күпме аңлайышһыҙ пункттар менән сыбарланған. Мәҫәлән, "сайттың йә интернеттағы биттең хужаһы" тигән төшөнсә үтә лә тайғаҡ, хәҙер бит кескәй балалар ҙа уны аса ла, алып бара ла ала. Паспорты ла булмаған бала ҡайҙа һәм нисек теркәлергә, унда ни ҡуйылырын контролдә торорға тейешме? Таратырға ярамаған материалдар ҙа аныҡ билдәләнмәгән, уның бөгөн ярауы ихтимал, ә иртәгә тыйып та ҡуйырҙар... Ә шул ваҡытта һин сайтыңа ай буйы инеп тә ҡарамағанһың икән, ти. Былтыр ҡыҫҡанға быйыл ҡысҡыртмаҫтар тимә!

Блогтарҙа һәм сайттарҙа "комментарий" тигән бик ҡыҙыҡ мөйөш бар. Унда һинең материалыңды ҡарайым тип кергән теләһә кем теләһә нәмә яҙа ала. Һинең бер ғәйепһеҙ яҙмаларыңды берәй дошманың кереп яманлап, шуға ҡушып тотош донъяны шартлатырға саҡырып та яҙып китеүе бар. Ләкин һине шуның өсөн терроризмда ғәйепләмәҫтәрме? Минеңсә, был закон ана шундай юҡ ерҙә йомортҡанан йөй табыр өсөн уйлап сығарылған. Ҡарап китһәң, бында барып ҡабыр ҡармаҡтар аҙым һайын. Мәҫәлән, мин бер кешене юҡҡа сығарам тиһәм, уның исеменән (хәҙер кеше тураһында мәғлүмәт табыу бер ни тормай) блог йә сайт астырып, унда ошо закон хәүефле тип тапҡан барлыҡ насар материалдарҙы элеп ҡуя алам. Төрмәгә ултыртыуын ултыртмаҫтар (хәйер, ул да ҡаралған), әммә бик оҙаҡ мейеһен серетерҙәр. Был йәһәттән билдәле кинофильмдан Жегловтың әйткәне иҫкә төшә: "Ә уға пистолетын теләһә ҡайҙа ташлап йөрөмәҫкә һабаҡ булыр!.."

Был законға ярашлы, сәйәсмәндәрҙе генә эҙәрлекләү мөмкиндер. Ҡалғандарына (наркоманлыҡ, терроризм, фәхишәлек һ. б.) закондар күптән ҡабул ителеп бөткән инде. Әлбиттә, интернет кеүек икһеҙ-сикһеҙ системаны ауыҙлыҡлап тотоу мөмкин түгел, ә айырым осраҡтарҙа һәм кәрәкле кешеләрҙе генә эләктереп алам тиһәләр, бының өсөн хәҙер дәүләттең законлы нигеҙе буласаҡ. Башҡорт сайттарына һәм блогтарына уның хәүефе юҡтыр, тип уйлайым, әйтеүемсә, беҙҙә әлегә тиклем көнөнә 3 мең кеше инеп сығырлыҡ порталдар ҙа булғаны юҡ...

**Алһыу ИШЕМҒОЛОВА, журналист, "Йәшлек" гәзите блогеры:** Блогер - айырым кеше, ә тотош редакция түгел. Үҙенең блогында нимә теләй, шуны яҙа. Бөгөн күптәрҙең мәғлүмәттәре дөрөҫ тә булмай әле. Күп ваҡыт кемделер, нимәнелер тәнҡитләүгә, әрләүгә һәм бысраҡ яғыуға ҡайтып ҡала. Киләсәктә, бәлки, блогерҙар "аҡылға ултырыр". Һәр хәлдә, блогер, сайтына нисә кеше инеүгә ҡарамаҫтан, киң мәғлүмәт сараһы була алмай, минеңсә. Был барлыҡ абруйлы баҫмаларҙы сенсация, буш хәбәр менән тулы "һары матбуғат"ҡа тиңләйәсәк, киң мәғлүмәт сараларының бәҫен төшөрәсәк.

Шулай ҙа блогерҙарҙан яҙмаһының дөрөҫлөгөн талап итергә кәрәк. Һәр нәмә күҙәтеү аҫтында булырға тейеш. Был күҙлектән ҡарағанда, ниндәйҙер яуаплылыҡ кәрәк. Бында, бәлки, блогерҙарҙы киң мәғлүмәт сараларына тиңләмәйенсә генә яуаплылыҡ йөкмәтергәлер? Шуға, закондың бөтә нескәлектәре лә эшләнеп еткерелмәгән, тип уйлайым.

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**XX быуаттың тәүге ике тиҫтә йылында булған ваҡиғалар Рәсәй тарихында тәрән эҙ ҡалдыра. Заман саҡырыуҙарына яуап бирә алмаған бөйөк империяның эсендә килеп тыуған әүҙем ҡаршылыҡ хәрәкәте тәүҙә манифестация-забастовкаларға, һуңынан революцияға, илдең ҡоролошо үҙгәреүенә һәм граждандар һуғышына килтерә. Ошо осорҙоң тағы бер үҙенсәлеге - рус булмаған милләттәрҙең, бигерәк тә дәүләттең көнсығышында йәшәгән мосолман халыҡтарының, шул иҫәптән башҡорттарҙың, XIX быуат дауамында барған оҙайлы "йоҡоһонан уяныуы". 1905-1907 йылдарҙағы революция ошо уяныуға этәргес була. Революцияның Башҡортостанға, башҡорт халҡына йоғонтоһо, милли хәрәкәттең барлыҡҡа килеүе һәм халыҡтың үҙаңы күтәрелеүгә сәбәп булған тарихи осор менән тарих фәндәре кандидаты Нурислам Мирхәйҙәр улы ҠАЛМАНТАЕВ таныштыра.**

# ХАЛЫҠТЫҢ ҮҘАҢЫ КҮТӘРЕЛЕҮГӘ...



## революция осоро ла сәбәпсе

### XX быуат башындағы демографик хәл

XIX быуат аҙағында, 1897 йылда, Рәсәйҙә беренсе бөтә халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы үтә. Уның мәғлүмәттәре буйынса, 1897 йылда Өфө губернаһында 2 миллион 196 мең кеше йәшәй. Шуларҙың 899 меңен - башҡорттар, 834 меңен - урыҫтар, 134 менен татарҙар тәшкил итә. Ырымбур губернаһында 1 миллион 600 мең халыҡтың 256 меңе башҡорттар була. Урыҫтар - 1 миллион 120, татарҙар 96 мең тәшкил итә. Дөйөм алғанда, Рәсәйҙә 1 миллион 311 мең башҡорт йәшәй.

1917 йылдың май айында Ваҡытлы хөкүмәт тә Рәсәйҙә халыҡ иҫәбен алыуҙы ойошторорға ҡарар итә. Кампания 1917 йылдың йәйендә үтә. Уның һөҙөмтәләре буйынса, башҡорттарҙың дөйөм һаны 1 миллион 732 мең кеше була һәм Рәсәйҙең дөйөм халҡына ҡарата 1,6 процентты тәшкил итә. Күрәһең, Зәки Вәлиди етәкләгән милли хәрәкәт "Ике миллионлы башҡорт халҡы исеменән мөрәжәғәт итәбеҙ", тип әйткәнендә, ошо мәғлүмәттәргә таянғандыр.

Һуңынан башҡорттар һанының ҡырҡа кәмеүе күҙәтелә. 1920 йылдағы халыҡ һанының иҫәбен алыу тулы булмай. Бынан тыш, даими рәүештә барған үҙгәрештәр сәбәпле, дөрөҫ кенә һандарҙы атауы ҡыйын. Академик Р. Кузеев раҫлауынса, Оло Башҡортостан сиктәрендә бер миллиондан ашыу башҡорт йәшәй. Халыҡтың күпләп кәмеүенең сәбәбе - Беренсе донъя һуғышы һәм Граждандар һуғышы. Граждандар һуғышы ваҡытында башҡорттар физик ысул менән тиҫтәләрсә меңләп юҡ ителгән. Шул уҡ йылдағы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, Миңзәлә өйәҙендә 157 мең башҡорт йәшәй. 1920 йылда өйәҙ яңы барлыҡҡа килгән Татар АССР-ына индерелә, был башҡорттар һанына кире йоғонто яһай. 1926 йылдағы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, Татарстанда ни бары 1752 башҡорт теркәлә. Ә Башҡортостанда 1926 йылда 626 мең башҡорт була. Күренеүенсә, халыҡ һаны ныҡ кәмей. Граждандар һуғышы, аслыҡ йылдары үҙ йоғонтоһон яһамай ҡалмай.

### XIX быуат аҙағы - XX быуат башында башҡорттарҙың хәле

Сәйәси хоҡуҡһыҙлыҡҡа, милли һәм дини ҡыҫырыҡлауҙарға, урыҫлаштырыуға, башҡорт ерҙәрен баҫып алыуға һәм административ баш-баштаҡлыҡҡа дусар ителгән башҡорт халҡы бик ауыр осор кисерә. Ошо ғәҙелһеҙлектәргә ҡаршы башҡорттар быға тиклем ике быуат-быуат ярым элек бик күп тапҡырҙар ихтилалдарға күтәрелә. Тап халыҡтың баш күтәреүе генә колонизаторҙар тарафынан тулыһынса ерҙәрҙе баҫып алыуҙы туҡтата, халыҡҡа аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлап ҡалырға булышлыҡ итә. Ләкин XIX быуатта үткәрелгән ике ышанлау башҡорт халҡының хәлен тамам бөлгөнлөккә төшөрә. Дәүләт тарафынан үткәрелгән был кампания ерле халыҡтар мәнфәғәттәрен инҡар итеп, ситтән күсеп килеүселәргә "артыҡ ерҙәрҙе" биреү менән мәшғүл була. Бигерәк тә аҫаба ерҙәре булған башҡорттар һәм ҡаҙаҡтар бик күп ерҙәрен юғалта ул осорҙа.

Башҡорттарҙың ере күп булғанда, малы күп, малы күп булғанда, көсө күп. Ер һәм мал төшөнсәһе бер-береһе менән тығыҙ бәйләнгән. З. Биишеваның яҙмаларында шундай бер фекер бар: "Беҙ Каруанһарайҙа техникумда уҡығанда Мәжит Буранғолов тигән егет "Мал" тигән бик матур йыр йырланы, - тип яҙа яҙыусы. - Көйө лә шәп. Әммә мин аңламаным, ни өсөн йыр малға бағышланған?" 50-се йылдарҙа, совет осоро ваҡытында уҡығанға күрә, Зәйнәб апай Биишева башҡорт тормошоноң мал менән бәйле булыуын бер аҙ күҙҙән ысҡындырғандыр, күрәһең. Башҡорт заводтарҙа күпләп эшләмәгән, сауҙагәрҙәре лә бармаҡ менән генә һанарлыҡ булған. Бар гүмере мал ҡарап, мал көтөп үткән. Ә мал тотоу өсөн икһеҙ-сикһеҙ ерҙәр кәрәк. Урыҫ яҙыусылары Успенский, Мамин-Сибиряк, башҡорт яҙыусылары Дауыт Юлтый һәм башҡалар үҙ әҫәрҙәрендә, ерҙәренән ҡолаҡ ҡағыу сәбәпле, башҡорт халҡының ныҡ бөлгөнлөккә төшөүе тураһында яҙа. Ситтәр тарафынан көслөк менән тартып ҡына алынмай ерҙәр. Башҡорттарҙың ҡайһы берәүҙәре биләмәләрен үҙҙәре үк ҡуртымға бирә, йә осһоҙға ғына һата, бер аҙҙан иһә ситтән көсеп килгән халыҡҡа үҙҙәре үк ҡол булып эшләй башлайҙар. Был йәһәттән ҡарағанда, үткән быуат менән беҙҙең быуат башы ауаздаш түгелме һуң? Бөгөн дә бит ер мәсьәләһе бик актуаль. Әгәр ерҙе һатырға рөхсәт бирелһә, хәлемде яҡшыртам, баламды уҡытам, тип, халыҡ бүлеп бирелгән пайҙарын һата башлауы ла ихтимал. XIX быуат аҙағында, XX быуат башында ла бындай хәлдәр күп күҙәтелгән. Зыялыларыбыҙ "Ни өсөн ерҙәрегеҙҙе һатаһығыҙ? Нисек йәшәргә уйлайһығыҙ?" тип, халыҡты иҫкәртеп, нәсихәт уҡып йөрөгән. Ләкин халыҡ ерҙең ҡәҙерен белеп етмәгән. "Ер күп бит әле", тип һатыуын белгән. Минцлов тигән краеведтың "В дебри Башкирии" тигән китабы бар. Шул китабында ул бер ғибрәтле ваҡиға хаҡында яҙа: "Бер башҡорт бабайы менән һөйләшеп торабыҙ. "Беҙҙең ер күп ул, ер бөтөрлөк түгел", тип әйткән була бабай. Шунан бер ваҡыт заводсылар ул ауыл янындағы бөтә урмандарҙы ҡырҡып бөтә. Һуңынан ул урмандар башҡорт бабайының башына оҡшап, тап-таҡыр тороп ҡалды..."

XX быуат башында башҡорттарҙың милли-азатлыҡ хәрәкәте яңы баҫҡысҡа күтәрелә. Ҡыҫырыҡланған халыҡтың сәйәси көрәшендә ер, дин һәм милләткә тиң хоҡуҡтарҙы биреү мәсьәләләре беренсе планға сыға. Уяныу һәм милли үҙаңдың күтәрелеүе күҙәтелә. Ҡыйыуһыҙ ғына булһа ла, зыялылар автономия хаҡында һөйләй башлай.

### Революцияның башланып китеүе

Революцияның башланып китеүе Гапон исемле рухани менән бәйле. 1904 йылдың аҙағында Петроградтың Путилов заводынан дүрт эшсене ҡыуалар. Улар Гапон етәкләгән "Санкт-Петербург фабрика-заводтары эшселәре йыйылышының" вәкилдәре була. Рухани әлеге эшселәрҙең ҡыуылыуын дөрөҫ түгел тип таба һәм тиҙ арала йыйылыш үткәрә. Унда петиция әҙерләнә, был петицияла яҙылған талаптар завод етәкселегенә еткерелә. Кәрәкле яуап ала алмағас, Гапон эшселәрҙе, петицияны үҙ ҡулдарығыҙ менән батшаға еткерергә кәрәк, тип, урамдарға сығырға саҡыра. Уның һүҙәре менән илһамланған Петербург эшселәре лидерҙары артынан эйәрә. Һөҙөмтәлә, манифестация унда ҡатнашыусы эшселәрҙе полиция тарафынан атыу менән тамамлана һәм был ваҡиға тарихта "Канлы йәкшәмбе" исеме аҫтында билдәле. Хөкүмәт забастовкаға сығыусыларҙы атып, уларҙы ҡурҡытырға теләй. Батша ла полицияның ниәттәре хаҡында хәбәрҙәр була. Ләкин туҡтатыу өсөн бер ни ҙә эшләмәй. Халыҡ ҡурҡмай. Киреһенсә, икенсе көндә лә, унан һуңғы көндәрҙә лә яңынан-яңы забастовкалар ойошторола. Беренсе эшселәр революцияһы шулай башланып китә.

Гапон фигураһы үҙе ҡапма-ҡаршылыҡлы. Уның батша һағының агенты булыуы хаҡында ла фекерҙәр йәшәй. Был юҫыҡтан ҡарағанда, уның сығышы, эшселәрҙе туплауы алдан уҡ уйышһыҙлыҡҡа дусар ителгән сара, провокация була. Уның үҙенең дә ғүмере бик аяныслы тамамлана. Гапон, баҫым көсәйгәс, сит илгә ҡаса. Бер аҙҙан кире Рәсәйгә ҡайта. Рәсәйгә ҡайтҡас, йәшерен йыйылышҡа дачаға саҡырыла. Унда ул эшселәрҙе ошо ғауғаға аңлы рәүештә ылыҡтырыуын әйтеп һала. Был һүҙҙәрҙе йәшеренеп торған эшселәр ишетеп ҡала. Улар үҙҙәренең лидерының хыянатын ғәфү итмәй һәм уны шунда уҡ аҫып китәләр.

Ләкин был революция халыҡтың дөйөм аңын күтәреүгә ныҡ булышлыҡ итә. Эшселәр һәм крәҫтиәндәр үҙҙәренең хоҡуҡтары яҡланыуын талап итә башлай, дәүләттә бер ни ҡәҙәр демократик үҙгәрештәр ҙә һиҙелә. Шулай уҡ урыҫ булмаған башҡа халыҡтарҙың үҙаңы күтәрелеүгә ғәйәт ҙур этәргес була 1905-1907 йылдарҙағы революция.

**Азамат АБУТАЛИПОВ яҙып алды. (Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Торлаҡ һәм ҡаралтылар

Ваҡытлы торлаҡтың тағы бер төрө - ҡабыҡ аласыҡ, бура аласыҡ йәки бурама. Бурама - тау, урман башҡорттарында торлаҡ булып хеҙмәт иткән ябай бура. Был дүрт мөйөшлө буралар нәҙек бүрәнәләрҙән төҙәлә (һүрәттәр), иҙәне һәм түбәһе булмай. Ҡыйығы алға һәм ҡабырға яҡҡа оҙонораҡ итеп сығарылып, ике яҡҡа ябыла. Бураманың тәҙрәһе булмаһа ла, бүрәнәләр араһында ярыҡтар ҡалдырылғанлыҡтан, уның эсе яҡты. Таҡта йәки ҡабыҡ ишекте рамға ултыртмай ғына, бер яҡҡа асылмалы итеп ҡуялар. Бураманы төҙөүгә төрлө ағас ҡулланыла, шулай ҙа ҡарағайға өҫтөнлөк бирелә. Ҡыйығы бик йыш транса менән ябылһа ла, ҡарағас ҡабыҡлы һәм һалабаш ҡыйыҡтар ҙа осрай. Ҡыйыҡты ел осормаһын өсөн уның өҫтөнә арҡыры һайғау һалына. Бураманың ишеккә ҡаршы яғында, ҡайһы бер осраҡта ҡабырғала бейек булмаған урындыҡтар ҡуйыла, ишектең уң йәки һул яғында сыуал эшләнә. И. Г. Георги һүҙҙәренсә, XVIII быуат һуңында бейек Урал тауҙарында йәшәүсе башҡорттар үҙҙәренең йәйге дүрт мөйөшлө, оҙонса тирмәләрҙең уртаһында тағанлы усаҡ урынлаштыра. Таға ҡаҙан аҫыла. XX быуат башында башҡорттар бурама уртаһына, бигерәк тә йәйге торлаҡтарҙа усаҡ эшләмәй. Күрәһең, Георги хаталанғандыр, сөнки XVIII быуатта башҡорттар эргәһендә булған бер генә сәйәхәтсе лә ағас тирмә эсендәге усаҡ хаҡында яҙмай.





Аласыҡҡа хас булғанса, бай башҡорттарҙың бурамаһы ике яҡлы була. Уның ишектән ингән яғында барлыҡ хужалыҡ кәрәк-яраҡтары, аҙыҡ-түлек һаҡлана, икенсе өлөшө торлаҡ булып хеҙмәт итә. Бик һирәк бер ҡыйыҡ аҫтында торған, әммә һәр ҡайһыһына айырым ишек булған бурамалар осрай. Уларҙың береһе - аш-һыу бүлмәһе һәм келәт, икенсеһе торлаҡ ролен үтәй. Ауылдарҙа бурама йәйге торлаҡ булараҡ осраштырғылаһа ла, ул йәйләү тормошо өсөн хас. Уны күсереп йөрөтөү мөмкин булғанлыҡтан, һәр башҡорт ғаиләһе бураманы йәйләү һаныса (икенән алып дүрткәсә) төҙөй.

Торлаҡ эсендә йәки уның эргәһендә усаҡ тоҡандырыуҙың ике генә маҡсаты бар: йә ризыҡ әҙерләү, йә торлаҡты йылытыу, йәиһә икеһен бер юҡғай башҡарыу. Ризыҡты усаҡ өҫтөндә лә, көлгә күмеп тә әҙерләгәндәр. Бындай усаҡ бесән ҡыуыш эргәһендә лә, конус формаһындағы ҡыуышта ла, ҡайһы берҙә түңәрәк туҙ аласыҡ йәки кәртә рәшәткәле тирмә эргәһендә лә эшләнгән. Түңәрәк торлаҡтарҙа ут бары тик уртала, бик йыш ер өҫтөндә, ҡайһы берҙә ситтәре балсыҡ менән ныҒытылған ут урынында яғылған. Дүрт мөйөшлө ваҡытлы торлаҡтарҙан бары тик бурамала ғына усаҡ яғылған. Әммә уртала түгел, бер яҡ мөйөштә. Был урында таштар бер-береһенең өҫтөнә теҙелеп, балсыҡ менән ныҒытыла һәм шунда ут тоҡандырыла. Усаҡ турыһында ҡыйыҡта төтөн сығыу өсөн тишек уйыла. Стеналарға ут ҡапмаһын өсөн улар балсыҡ менән һылана. Шулай уҡ бурамаларҙа сыуалдар ҙа осрай.

✓ ***Беҙ нәҫелдән күсеүсе 30 сирҙе өйрәндек, гендарҙа улар өсөн яуап биргән мутацияларҙы таптыҡ һәм һөҙөмтәләрҙе "Республика перинаталь үҙәге"нең медик-генетик консультацияһы эшмәкәрлегенә индерҙек.***

# АЛМА АҒАСЫНАН

## йәғни Ер йөҙөндә үҙенең геномында нәҫелдән күсеүсе

**Йыш ҡына ата-әсәләрҙең балаларын "атаңа оҡшап" йәки "әсәңә оҡшап" тип битәрләгәненә шаһит булаһың. Ә маҡтарға тура килһә инде, әлбиттә, "үҙемә оҡшап" тигән һүҙҙәр ҡулланыла. Ғәмәлдә, был ниндәй дәрәжәлә ысынбарлыҡҡа тура килә һәм улар нигеҙлеме? Алма ағасынан алыҫ төшмәй, тигәндәре дөрөҫмө, әллә уның ситкә тәгәрәүе лә мөмкинме? Атай-олатайҙарҙың ғаилә ҡорғанда ете быуынын тикшереүе урынлымы? Барлыҡ һорауҙарға яуапты Башҡортостанда, Рәсәйҙә генә түгел, сит илдәрҙә лә билдәле ғалимә, биология фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр академияһы академигы, РФА Өфө ғилми үҙәгенең Геномика һәм кешенең молекуляр генетикаһы лабораторияһы мөдире, популяцион һәм медицина генетикаһы белгесе Эльза ХӨСНӨТДИНОВА менән әңгәмәлә сағылдырырға тырыштыҡ. Һүҙ - гәзитебеҙҙең сираттағы ҡунағына.**

**▸ Эльза Камил ҡыҙы, биологияға әсәйегеҙ һөйөү тәрбиәләгән тип уҡығайным, ә бына тап генетика, ул ғына ла түгел, медицина генетикаһы үҙегеҙҙең булмышығыҙ, асылығыҙ икәнлеген ҡасан аңланығыҙ?**

- Генетика менән шөғөлләнеү теләге Мәскәүҙә аспирантураға уҡырға ингәс, медик-генетик үҙәктә барлыҡҡа килде. Унда мин популяцион генетика (төрлө популяцияларҙың - башҡорттарҙың, рустарҙың, татарҙарҙың һ.б.) генетик тарихы менән шөғөлләнергә тейеш инем. Нигеҙҙә, барыбыҙ ҙа төрлө-төрлө, бигерәк тә нәҫелдән килгән ауырыуҙарҙың генын өйрәндек. Хәҙер барлыҡ ауырыуҙарҙың ике төркөмгә бүленеүе мәғлүм: 5 проценты нәҫелдән килә, 95 проценты башҡа бик күп факторҙарға бәйле сирҙәр. Йәғни уларҙың барлыҡҡа килеүенә бирешеүсәнлек гены яуап бирә. Әммә кешенең, мәҫәлән, миокарда инфарктына, гипертонияға бирешеүсәнлек гены бар икән, ул мотлаҡ ауырыясаҡ, тип раҫлап булмай. Был гендар әүҙемләшһен өсөн тирә-яҡ мөхит факторҙарының йоғонтоһо булырға тейеш. Мәҫәлән, әгәр кеше тәмәке тарта, спиртлы эсемлектәр эсә, майлы ризыҡты саманан артыҡ күп ҡуллана, спорт менән шөғөлләнеү түгел, артыҡ бер аҙым да атламай икән - былар барыһы ла үҙенең эҙен ҡалдыра. Улар ошо гендарҙы "уята" ла инде, йәғни гендар менән бергәләп миокарда инфаркты йәки гипертония барлыҡҡа килеүгә этәрә. Әгәр имен булмаған тирә-яҡ мөхит факторҙары йоғонтоһо юҡ икән, йәки бирешеүсәнлек гены аҙ булһа, кеше ауырымай.

Мине, әлбиттә, ошо тикшеренеүҙәр ҡыҙыҡһындырҙы һәм аспирантура тамамлағас, Башҡортостан Фәндәр академияһының Биохимия һәм генетика институтында медицина генетикаһы менән шөғөлләнә башланым. Сөнки был йүнәлештә ауырыуҙарҙы иҫкәртеү кеүек мөһим эштәр менән шөғөлләнеп буласаҡ икәнен күҙалланым. Мәҫәлән, кемдер нәҫелдән килгән ауырыу менән сирләй һәм уның балаһына ла күсеүенән ҡурҡа икән, ул иртә йәки бала тыуғанға тиклем ДНК-диагностика үткәртеп, һөҙөмтәне белә ала. Әгәр яралғы ниндәйҙер мутацияға эйә икән, беҙ ундағы сир төрөн, уны дауалап буламы, юҡмы икәнлеген асыҡлайбыҙ. Дауалау мөмкин булмаһа, табип, әлбиттә, аборт яһатырға ҡушасаҡ. Әгәр беҙ ниндәйҙер сирҙең генында мутация барлығын, әммә уны дауалап була икәнлеген асыҡлаһаҡ, ул ваҡытта баланы табырға мөмкин. Мәҫәлән, фенилкетонурия - аҡыл үҫешенең артта ҡалыуы. Атай-әсәй һау-сәләмәт булырға, әммә ошо сир булған мутациялы генды йөрөтөүселәр булып иҫәпләнергә мөмкин. Баланың сирле икәнен бала тыуғанға тиклем асыҡлау өсөн ДНК-диагностика үткәрелә. Мутация булған осраҡта ла фенилкетонурияны дауалап була һәм бала тыуғас та уға шунда уҡ дауалау препараттары, йәғни етешмәгән фермент бирелә. Артабан инде бала сәләмәтләнә. Тағы бер миҫал итеп галактоземия - һөт шәкәрен ҡабул итмәүҙе алайыҡ. Ҡарап тороуға ғәҙәти бала тыуа, уны шунда уҡ әсәһенә имеҙергә бирәләр, әммә өс көн үткәс, ул үлә. Ата-әсә үҙҙәрендә шундай уҡ мутациялы хромосома йөрөтөүен һәм балаға тапшырыуын башына ла килтермәй. Был осраҡта хатта бер тамсы һөт тә үлемесле булыуы ихтимал. Балала һөт шәкәрен эшкәртә торған фермент юҡ. Был осраҡта инде баланы тыуғас та һөтһөҙ диетаға ултыртырға кәрәк. Һөтлө ризыҡтар ҡулланмағанда, ул башҡа тиҫтерҙәренән бер яғы менән дә айырылмаясаҡ.

**▸ Әлбиттә, әгәр атай йәки әсәй ауырый икән, баланың сирен диагностикалау еңелдер. Әммә икеһе лә һау-сәләмәт, әммә үҙҙәрендә мутациялы ген йөрөтөүсе икәнлеге ике ятып бер төшөнә инмәүселәр балаһының ниңә сирләүен ҡайҙан белһен?**

- Ысынлап та, ер йөҙөндә үҙенең геномында нәҫелдән күсеүсе ниндәйҙер сирҙең мутацияһын йөрөтмәгән бер генә кеше лә юҡ. Кәм тигәндә, һәр беребеҙҙең генында 10 мутациялы ген бар. Шуға ла гендарындағы сирҙәр тап килгән ике кешенең ғаилә ҡороуы хәүефе бик юғары. Беҙ нәҫелдән күсеүсе 30 сирҙе өйрәндек, гендарҙа улар өсөн яуап биргән мутацияларҙы таптыҡ һәм һөҙөмтәләрҙе "Республика перинаталь үҙәге"нең медик-генетик консультацияһы эшмәкәрлегенә индерҙек. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда яралғыға ошо 30 ауырыу буйынса ДНК-диагностикаһы уҙғарыла. Бигерәк тә ғаиләлә ниндәйҙер сирле кеше булып, ата-әсә тыуасаҡ балаһының сәләмәтлеген белергә теләһә, ошо үҙәктә тикшереү үтә ала.

Икенсе төркөм тирә-яҡ мөхит йоғонтоһона бирелеүсе факторҙарға бәйле тигәйнем инде. Был төркөм өсөн дә иртә ДНК-диагностикалау үткәрә алабыҙ. Бында инде балаға 7-10 йәиһә 20 йәш булыуы мөмкин. Уларҙа теге йәки был сиргә бирешеүсәнлек гены бармы икәнлеген асыҡлайбыҙ һәм профилактика өсөн нимәләр эшләргә кәрәклеген тәҡдим итәбеҙ. Төрлө төбәктә, төрлө этник төркөмдә бирешеүсәнлек гены һәм гендағы мутациялар төрлөсә. Мәҫәлән, Австралияла гендағы мутациялар бер төрлө, беҙҙә, мәҫәлән, башҡорттарҙа, татарҙарҙа, бөтөнләй икенсе төрлө. Яҡуттарҙа ул бөтөнләй дүртенсе төрҙә булыуы мөмкин. Бирешеүсәнлек гены менән дә шундай уҡ күренеш. Мәҫәлән, ҡурылдай астмаһын булдырыусы бирешеүсәнлек гены ҡайҙалыр Францияла - бер төрлө, беҙҙең этник төркөмдәрҙә - бөтөнләй икенсе. Шуға күрә ошо гендарҙы, бигерәк тә үҙебеҙҙең төбәк территорияһында йәшәгән этник төркөмдәрҙекен, өйрәнергә тейешбеҙ. Һәм бала тыуғанға тиклемге ДНК-диагностика үткәреүҙе ошо этник төркөмдәрҙәге ауырыуҙар буйынса ғәмәлгә ашырыу зарур. Был республиканың һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә ҙур файҙа тип уйлайым, сөнки тикшеренеүҙәр республика халҡы мәнфәғәтенә эшләнә бит.

Әлбиттә, тикшеренеү бик ҡиммәтле, шуға ла беҙ 30-50 илде берләштергән халыҡ-ара консорциумға инәбеҙ. Ағза-илдәр үҙ территорияһы буйынса ауырыуҙарҙы өйрәнә, мутациялы гендарҙы таба, беҙ уларҙың ҡорамалдарын файҙаланып, үҙебеҙҙә шундай уҡ эшмәкәрлек алып барабыҙ һәм, дөйөмләштереп, тотош донъя буйынса генетик карта төҙөйбөҙ. Миграция ағымдары көслө ваҡытта был да бик мөһим. Шуға күрә бөтөн донъя ошо картаны, сит ил граждандарында ниндәй мутациялар барлығын белергә тейеш. Сөнки ул медик-генетик консультацияға килә икән, ҡабул итеүсе табип генетик картаны ҡарап ҡына уның ниндәй мутациялары барлығын асыҡлай аласаҡ. Ә бер сир өсөн яуаплы мутациялар 1000-дән артыҡ булыуы ихтимал. Мәҫәлән, беҙгә бер ғаилә килеп, балаларында аныҡ бер сирҙең мутацияһы бармы, юҡмы икәнлеген тикшереүебеҙҙе һораны икән, ти. Беҙ барлыҡ мутацияларҙы ла эҙләп ултыра алмайбыҙ, быға тотош ғүмер ҙә етмәйәсәк. Шуға күрә, мәҫәлән, башҡорттарға ниндәй мутациялар хас икәнен аныҡ беләбеҙ икән, шулар буйынса тикшереү үткәреп, ике сәғәт эсендә һөҙөмтәне күрәбеҙ.

**▸ Һәр популяцияның мутация гендары төрлө, мәҫәлән, бер үк ауырыу төрлө төбәктә төрлөсә күҙәтелеүе мөмкин икән, Башҡортостанда йәшәп, Башҡортостанда ауырыһаң, Японияла йәки Ҡытайҙа эшләнгән дарыуҙарҙы ҡулланыу урынлымы? Беҙ бит, ғәҙәттә, сит ил дарыуҙарына өҫтөнлөк бирергә тырышабыҙ, йәнәһе лә, ситтә етештерелгәс, ул йоғонтолораҡ...**

- Хәҙер геномикала яңы йүнәлеш барлыҡҡа килде - фармакогенетика. Ул шәхси һиҙгерлек гендарын һәм дарыуҙарға, дауалау препараттарына тотороҡлолоҡ гендарын өйрәнә. Раса айырмалыҡтары һөҙөмтәһендә, беҙгә тура килгән дарыуҙың икенселәргә кире йоғонто яһауы ла мөмкин. Йәғни Европа халҡына тура килгән дарыу азиаттарға бөтөнләй тура килмәүе ихтимал. Йәки европалыларға дозаны 1 миллиграмм күләмендә ҡулланырға кәрәк булһа, африкандарға 0,5 миллиграмм йәиһә ике тапҡырға күберәк ҡулланырға кәрәк буласаҡ. Ни өсөн теге йәки был дарыуҙы ҡулланғандан һуң кешеләрҙә кире һөҙөмтә барлыҡҡа килә, хатта үлемесле булыуы ла бар? Америала эшләгәндә бер профессорҙың лекцияһына йөрөнөм. Ул быны шулай аңлатты: кардиоцентрға, мәҫәлән, миокарда инфаркты менән 10 кеше һалынды икән, ти. Барыһына ла бер үк дарыу бирәләр. Бишеһе терелеп сыға, бишеһе вафат була. Ә сәбәп ябай ғына: бишәүҙә - шәхси һиҙгерлек гены, ә ҡалғандарында инде шәхси тотороҡлоҡ гены булған, шуға был препарат уларға ярҙам итмәгән. Йәғни һәр кешегә шәхси ҡараш, шәхси дозаны һайлап алыу кәрәк. Тап шул һайлап алынған доза уға ярҙам итәсәк. Бөгөн нимә күрәбеҙ: бары тик 20 дауалау препараты өсөн генә шәхси һиҙгерлек һәм тотороҡлолоҡ гены тикшерелгән. Уларҙың инструкцияһында аныҡ итеп, мәҫәлән, 1:1 генотиплы кешеләргә был дарыуҙы шунса миҡдарҙа ҡулланырға кәрәк, ә инде 2:2 генотиплы кешеләргә был препаратты ҡулланырға ярамай, ул кире һөҙөмтә бирәсәк, тип яҙылған.



***Әммә кешенең, мәҫәлән, миокарда инфарктына, гипертонияға бирешеүсәнлек гены бар икән, ул мотлаҡ ауырыясаҡ, тип раҫлап булмай. Был гендар әүҙемләшһен өсөн тирә-яҡ мөхит факторҙарының йоғонтоһо булырға тейеш. Мәҫәлән, әгәр кеше тәмәке тарта, спиртлы эсемлектәр эсә, майлы ризыҡты саманан артыҡ күп ҡуллана, спорт менән шөғөлләнеү түгел, артыҡ бер аҙым да атламай икән - былар барыһы ла үҙенең эҙен ҡалдыра. Улар ошо гендарҙы "уята" ла инде, йәғни гендар менән бергәләп миокарда инфаркты йәки гипертония барлыҡҡа килеүгә этәрә. Әгәр имен булмаған тирә-яҡ мөхит факторҙары йоғонтоһо юҡ икән, йәки бирешеүсәнлек гены аҙ булһа, кеше ауырымай.***

***✓ Әлеге ваҡытта математиканы өйрәнеүгә һәләт генын тикшерәбеҙ. Эйе, ундай ген бар, әммә ул һәр кемдә лә түгел. Бала төп мәктәп программаһын аңлай алырға мөмкин. Ә артабан инде ул был предметты үҙләштерә алмай.***

# АЛЫҪ ТӨШМӘЙ,

## ниндәйҙер сирҙең мутацияһын йөрөтмәгән бер генә кеше лә юҡ

Беҙ ҙә лабораториябыҙҙа тикшеренеүҙәр алып барабыҙ. Галоперидол (шезофренияны дауалағанда ҡулланыла) препаратына шәхси һиҙгерлек һәм тотороҡлолоҡ гендарын өйрәнәбеҙ һәм шәхестең ниндәй генотипҡа ҡарауынан сығып, төрлө дозала ҡулланыуҙы тәҡдим итәбеҙ. Ҡурылдай астмаһын дауалаусы препараттарҙы ла тикшерәбеҙ. Был бик мөһим һәм артабан, киләсәктә, беҙҙең медицина тармағы ауырыуҙы түгел, ә аныҡ сирлене дауалар тип күҙаллайбыҙ. Сөнки медицина шәхси буласаҡ, йәғни һәр ауырыуҙы уның генетик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, индивидуаль рәүештә дауалаясаҡтар. Ҡыҫҡаса ғына итеп аңлатҡанда, шундай картина күҙаллана: бөгөн бөтөн донъя буйынса 2 мең кешенең геномындағы 3 миллиард пар хәреф тулыһынса уҡылған. Хәҙер төрлө популяциялар бер-беребеҙҙән нимә менән айырылыуыбыҙҙы асыҡларға тырышабыҙ. Шулар барыһы ла уҡылып бөткәс, һәр кемгә барлыҡ гендары яҙылған генетик паспорт биреләсәк. Табиптар шуларҙы уҡырлыҡ дәрәжәлә белемле булырға тейеш һәм ул медицина генетикаһын аңларға, кешенең генетик паспортына ҡарап - дауалау препаратын, олоғая бара уның ниндәй ауырыуҙары ҡалҡып сығыу ихтималлығын алдан күреп, профилактика сараларын тәғәйенләргә тейеш. Йәғни медицина профилактик йүнәлешле буласаҡ.

Популяцион генетика күҙлегенән ҡарағанда һәр популяцияны айырып өйрәнеү ҙә мөһим. Сөнки гендар төрлө, мәҫәлән, көньяҡ, төньяҡ, һ.б. Кеше быуаттар буйы бер территорияла, бер төбәктә йәшәп, шундағы климатҡа, йышлыҡтарға өйрәнә һәм икенсе ергә күсенеп китһә, ауыр кисерә, ауырый башлай, һаулығы насарая. Сәбәп ябай - беҙҙә адаптация гены юҡ.

Генетик паспорттар һәм донъяның генетик картаһы ғына түгел, хәҙер спортсының генетик картаһы эшләнә. Мәҫәлән, беҙ балаларыбыҙҙы ниндәйҙер спорт менән шөғөлләндерергә тырышабыҙ. Ә уның теге йәки был спорт төрөнә бирешеүсәнлек гены бармы, юҡмы икәнен уйлап та тормайбыҙ. Хәҙер иһә баланы спортҡа биреүҙән фәтеүә булырмы, юҡмы икәнен дә асыҡларға мөмкин. Шулай уҡ репродуктив сәләмәтлектең генетик картаһы бар. Йәғни ни өсөн ҡатын-ҡыҙ балаға уҙмай, ни өсөн ауырын йөрөтә алмай һ.б. Йәғни барлыҡ йүнәлештәр буйынса ла генетик карталар эшләргә мөмкин. Рәсәйҙә лә улар ҡулланыла һәм беҙ ҙә үҙебеҙҙең институтта уларҙы эшләй алабыҙ. Сит илдәрҙә иһә медицина тикшереүен генетик карта менән үтәләр.

Дөрөҫөн әйткәндә, беҙҙең лабораторияла етерлек мәғлүмәт һәм база бар, әммә уны тормошҡа ашырыу өсөн финанслау зарур. Ә беҙҙең эшмәкәрлек әлеге ваҡытта фән менән генә шөғөлләнеүгә ҡайтып ҡала. Әгәр халыҡҡа хеҙмәт күрһәтә башлаһаҡ, уның өсөн ваҡыт һәм был хеҙмәтте тормошҡа ашырыу өсөн ниндәйҙер үҙәк, махсус лаборатория асырға кәрәк буласаҡ. Ә хеҙмәткәрҙәргә килгәндә инде, белгестәр етерлек, сөнки минең етәкселегемдә генә 100-ҙән ашыу фән кандидаты, 10 фән докторы, генетика буйынса белгестәр әҙерләнде.

Хәҙер медицина молекуляр медицинаға күсә бара. Ә сирҙең клиник билдәләре һуңыраҡ барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, миотоник дистрофия тигән ауырыу бар. Ул 30-40 йәштә генә билдәле була. Кеше тыныс ҡына йөрөй, уҡый, эшләй һәм 30 йәшендә ҡапыл нервы-мускулдар системаһында деградация башлана. Артабанғы биш йыл эсендә ул вафат була. Ә бит был хаҡта тыуғас та, йә булмаһа, 5-10 йәшендә үк асыҡлап, ауырыуҙы иҫкәртеп була. Ул осраҡта сир йә бөтөнләй аҙмай, йә олоғайғас ҡына килеп сығыуы ихтимал. Йәки яман шеш гены. Беҙ бөйөр, простата биҙе, ашҡаҙан, түллек биҙе һәм күкрәк яман шеше гендарын тикшерәбеҙ. Шундай гендар бар, мәҫәлән, BRCA1 күкрәк яман шешенең ғаилә формаһын йөрөтә. Ғаиләлә өләсәһе йәки әсәһе ауырыған икән, ҡыҙҙары йәки ейәнсәрҙәре диагностикаға килһә, уның бирешеүсәнлеген асыҡларға була. Был инде сирҙең таралыуына ҡаршы эшмәкәрлек, шулай уҡ профилактика алып барырға мөмкинлек бирә.

**▸ Бөтөн ил менән алкоголгә, тәмәке тартыуға, наркотиктарға ҡаршы көрәшәбеҙ. Был асоциаль күренештәрҙең дә үҙҙәренең гены бармы?**

- Уларға ла, шулай уҡ суицид, агрессия тәртибенә лә бирешеүсәнлек гендары бар һәм улар өйрәнелгән, беҙҙең лабораторияла ла тикшерелә. Әммә бирешеүсәнлек гендары бары тик имен булмаған факторҙар йоғонтоһонда ғына үҫешә икәнен дә билдәләйек. Мәҫәлән, кемдәлер бындай гендар бар һәм уның аш табынында һәр саҡ шешә ултыра, кәйеф-сафаға ҡоролған табындар йыш үткәрелә, дуҫтары ла эсергә яратыусыларҙан икән, тимәк, был кеше алкоголикка әйләнә. Әгәр ата-әсә балаһында шундай гендар булыуын күҙаллап, уны кире йоғонто яһаған компанияларҙан аралай, үҙе насар өлгө күрһәтмәй икән, ундай бала алкоголикка әйләнмәй. Йәғни бында нисбәт 50:50 тиергә мөмкин. Шулай уҡ ата-әсә балаһының һәр икеле билдәһе йәки һәр уңышһыҙлыҡтан һуң депрессияға бирелеп, үлер сиккә еткәнен тойһа, шунда уҡ психологҡа мөрәжәғәт итергә тейешлеген дә күҙ уңында тоторға бурыслы. Баланы үҙ-үҙенә ҡул һалыу сигенә еткермәү зарур. Әммә һәр ҡайһыбыҙҙа психологик тәжрибә булыуға ҡарамаҫтан, бушамайбыҙ, ваҡытыбыҙ юҡ, эшебеҙ күп һ.б. Әгәр кешелә ундай бирешеүсәнлек гены юҡ икән, уның икеле алыуҙарға ла, әрләүҙәргә лә иҫе китмәйәсәк. Миҫал өсөн Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында концлагерҙарҙа булған ватандаштарыбыҙҙы ғына алып ҡарағыҙ. Ниндәй ауыр шарттарҙа ла улар йәшәү өсөн көрәшкән. Ә бит уйлап ҡараһаң, үҙ ғүмереңә ҡул һалыу ошо ауырлыҡтарҙан ҡотолоуҙың иң еңел юлы булыр ине.

Наркоманлыҡ менән дә шундай уҡ хәл. Бер ваҡыт мәктәптә уҡыусыларға лекция уҡырға тура килде. Улар үҙҙәре белдереүенсә, кластағы балаларҙың 70 проценты наркотик ҡулланып ҡараған. Әгәр кешелә наркотиктарға бирешеүсәнлек гены бар икән, уға бер тапҡыр наркотик ҡулланып ҡарау ҙа етә. Әгәр был ген булмаһа, организм ул ағыуҙы бөтөнләй ҡабул итмәйәсәк һәм ҡоҫтора башлаясаҡ. Йәғни кемдә спиртлы эсемлектәргә, наркотикка, тәмәкегә бирешеүсәнлек бар, ул шунда уҡ ошо ҡармаҡҡа ҡабасаҡ. Шуны ла онотorға ярамай: бөтөн нәмә үҙеңә һәм тәрбиәгә, һине урап алған мөхиткә бәйле. Юҡһа, үҙеңдә бирешеүсәнлек гены булыуын асыҡлаусылар баштарын страус һымаҡ ҡомға тығып, маңлайыма нимә яҙылған, тип, үҙ-үҙҙәренә ҡул һелтәп ҡуйырға әҙер генә тора. Ә бит ошо мәлдә кеше ҡап уртала тора һәм ҡайһы яҡтың еңеүе тап үҙенә бәйле.

Гендар шулай уҡ характер һыҙаттарына, темпераментҡа йоғонто яһай. Ғаиләлә ике бала булып, береһе шуҡ, хәрәкәтсән, икенсеһе тыныс һәм яй икән, бында ла 40-50 процент осраҡта гендар яуаплы. Сангвиник йәки меланхолик баланы икенсе кеше итеп тәрбиәләү мөмкин түгел, ләкин саҡ ҡына үҙгәртергә була. Әммә ата-әсә шуны ла белергә тейеш: әгәр бала ултырған урынында сыҙай алмаһа, уны хоккейға түгел, шахматҡа, шашкаға бирергә кәрәк. Йәки - киреһенсә. Шул осраҡта ғына баланс буласаҡ.

**▸ Белем биреү системаһын ҡарағанда, мәҫәлән, бер бала математиканы ярата, әммә гуманитар фәндәрҙе бер нисек тә үҙләштерә алмай, йәки - киреһенсә. Генетика күҙлегенән ҡарағанда, бында ла гендар үҙ ролен уйнаймы?**

- Белем биреүҙе лә персоналләштерергә йәки төркөмдәргә бүлеп алып барырға кәрәк. Сөнки балаларҙың барыһы ла бер кимәлдә һәләтле түгел. Кешеләр бер-береһенән ныҡ айырыла. Шуға күрә, баланы мәктәпкә әҙерләгәндә үк, бер ниндәй гендарға япһармай ғына, уның һәләтен асыҡлап, шул йүнәлеште һайларға кәрәк. Әлбиттә, хәҙер психологик генетика бар, ул сит илдә киң таралған һәм беҙ ҙә ошо йүнәлештә эш башланыҡ. Йәғни әлеге ваҡытта математиканы өйрәнеүгә һәләт генын тикшерәбеҙ. Эйе, ундай ген бар, әммә ул һәр кемдә лә түгел. Бала төп нигеҙҙәрҙе өйрәнергә, мәктәп программаһын аңлай алырға мөмкин. Ә артабан инде ул был предметты үҙләштерә алмай. Шуға ла бала мәктәпкә уҡырға ингәндә үк уның менән психологтар эш алып барып, теге йәки был предметҡа һәләт кимәлен асыҡлап, махсус йүнәлешле мәктәптәргә йәки синыфтарға бирергә кәрәк.

**▸ Ультратауышлы тикшереүҙәр ДНК ептәрен үҙгәртә, тиҙәр…**

- УЗИ организмға бөтөнләй кире йоғонто яһамай. Рентгентты, ысынлап та, йыш үтергә ярамай. Сөнки иң аҙ күләмдәге доза ла кеше организмында тупланырға мөмкин. Ул саҡта инде ниндәйҙер үҙгәрештәр буласаҡ. Әммә бында ла шәхси һиҙгерлек гены үҙ ролен уйнай. Химия терапияһы ла шундай уҡ һөҙөмтәгә эйә, уның да һәр кешегә йоғонтоһо төрлөсә. Иң мөһиме - һәр нәмәлә сама белергә кәрәк. Яман шештең барлыҡҡа килеү теорияһы буйынса, организмда мутациялар каскады бара. Мәҫәлән, кемдер нурландырыу алған, кемдер көслө антибиотик ҡабул иткән һәм организмдың ниндәйҙер өлөшөндә мутация барлыҡҡа килә. Әгәр 10-15 мутация туплана икән, яман шеш гендарына һиҙгер урында яман шеш барлыҡҡа килә лә инде. Мәҫәлән, кешелә ябай ғына шеш бар икән, ниндәйҙер этәргес булыу менән уның күҙәнәктәре туҡтауһыҙ бүленә башлай һәм яман шешкә әүерелә. Әммә бында ла процесс һәр кешелә төрлөсә күҙәтелә. Мәҫәлән, Чернобыль фажиғәһе эҙемтәләрен бөтөрөүҙә күпме кеше ҡатнашты, барыһы ла бер полигонда булыуға ҡарамаҫтан, һәр кемдә уның эҙемтәһе төрлөсә. Былар барыһы ла шәхси һиҙгерлеккә бәйле. Беҙ үҙебеҙҙең ниндәй дәрәжәлә һиҙгер икәнлегебеҙҙе белмәйбеҙ. Шуға күрә, ҡабатлағандан доға иҫкермәй, тигәндәй, тағы бер тапҡыр әйтергә мәжбүрмен - медицина персональ һәм профилактика йүнәлешендә булырға тейеш.

**▸ Һуңғы ваҡытта милләт-ара никахтарға ҡырҡа ҡаршы сығыу күҙәтелә. Ә һеҙ, киреһенсә, бер милләт араһындағы никахтарҙа мутация осраҡтары йышыраҡ осрай, тигән теорияны яҡлайһығыҙ…**

- Был, нигеҙҙә, изоляцияла йәшәгән милләттәргә ҡағыла. Мәҫәлән, Дағстан тауҙарында йәки йәһүдтәр араһында ниндәйҙер изоляцион популяциялар бар. Йола буйынса, улар башлыса үҙ-ара ғына ғаилә ҡора (хатта яҡын туғандар үҙ-ара никахҡа инә) һәм был традиция быуаттар төпкөлөнә барып тоташа. Шул сәбәпле, популяцияла ҡайһы бер ауырыуҙарҙың тупланмаһы барлыҡҡа килә. Башҡорттарҙа иһә башҡаларҙа йыш осраған ауырыуҙар юҡ тиерлек (улар борон-борондан үҙ ҡәбиләһендә ете быуын айырылыуын ныҡлы күҙәткән, унан һуң, икенсе ҡәбилә-ырыуҙарҙан ҡыҙ алыу, ҡыҙ биреү йолаһы киң таралған). Булғандарының да ҡайһы берҙәре Европала, икенселәре Азияла күҙәтелгән күләмдә. Сөнки башҡорттар азиат компонентына эйә, мәҫәлән, Пермь крайындағы, Бөрйән районындағы башҡорттарҙың 50 процентында - азиат, 50 процентында Европа компоненты бар. Татарҙарҙа иһә был күрһәткес - 8-12, рустарҙа 3-5 процент ҡына. Йәғни, милләт-ара, бер милләт араһындағы ғына никахтар яҡшыраҡ, тигән фекер ниндәйҙер осраҡта дөрөҫ, ниндәйҙер осраҡта хаталы. Әммә төп мөһим факт - геномдарҙың төрлөлөгө, сөнки ул осраҡта сирҙәр кәмерәк була. Милләт, халыҡ ни тиклем аҙыраҡ, шул тиклем гендарҙа бер иш мутациялар күберәк һәм бындай популяция вәкилдәре ғаилә ҡорғанда сирле бала тыуыу хәүефен арттыра.

***Генетик паспорттар һәм донъяның генетик картаһы ғына түгел, хәҙер спортсының генетик картаһы эшләнә. Мәҫәлән, беҙ балаларыбыҙҙы ниндәйҙер спорт менән шөғөлләндерергә тырышабыҙ. Ә уның теге йәки был спорт төрөнә бирешеүсәнлек гены бармы, юҡмы икәнен уйлап та тормайбыҙ. Хәҙер иһә баланы спортҡа биреүҙән фәтеүә булырмы, юҡмы икәнен дә асыҡларға мөмкин. Шулай уҡ репродуктив сәләмәтлектең генетик картаһы бар. Йәғни ни өсөн ҡатын-ҡыҙ балаға уҙмай, ни өсөн ауырын йөрөтә алмай һ.б. Йәғни барлыҡ йүнәлештәр буйынса ла генетик карталар эшләргә мөмкин. Рәсәйҙә лә улар ҡулланыла һәм беҙ ҙә үҙебеҙҙең институтта уларҙы эшләй алабыҙ. Сит илдәрҙә иһә медицина тикшереүен генетик карта менән үтәләр.***

**(Дауамы 12-се биттә).**

**✓ Көндәр буйы карауатта һүҙһеҙ ятҡан берәҙәк ата-әсәһенең был донъяла юҡлыған белгәс тә, йөҙөнә бер ниндәй ҙә үҙгәреш-маҙар сығарманы, әйтерһең дә, уға күршеләрҙең бесәйе үлгән, тигән хәбәр генә еткерҙеләр...**






* * *

Иң яҡын кешеһенән бер ваҡытта ла бер ни ҙә йәшереп йөрөп ғәҙәтләнмәгән Рәхилә улынан ишеткән яңылыҡты хәләл ефетенә һөйләне.

- Бәлки, ул түгелдер... Осраҡлы тап килеү генәлер, - тигән булды Фитрат.

- Бәлки... - тип ризалаша бирергә ҡуйҙы Рәхилә лә. - Тик уның бөтә билдәләре лә, хатта эсенең һул яғында урынлашҡан аппендицитҡа яһалған операция эҙенә хәтлем тап килә.

- Барып, үҙен күрһәң, яҡшы булыр ине, - тине бер аҙҙан Фитрат ғәҙәттәгесә аҡыллы ҡарашын хәләл ефетенә төбәп. - Моғайын, уға берәй ярҙам кәрәктер...

- Ниндәй ярҙам?.. Ғәлимйән уны кәрәгенсә медицина ярҙамы менән тәьмин итә бит... - Рәхилә баштараҡ ирен әллә ни төшөнөп етмәне.

- Ундай берәҙәктәр, ғәҙәттә, социаль ярҙамға мохтаж була, - тине Фитрат. - Үҙең әйтәһең бит, хатта паспорт-маҙары ла юҡ, тип.

...Бала саҡтан Ер йөҙөндәге кешеләргә генә лә түгел, хатта һәр йән эйәһенә ҡарата ифрат миһырбанлы итеп тәрбиәләнеп үҫте Фитрат. Ябай ғына итеп әйткәндә, үҙ ғүмерендә бер себен, йә иһә тараҡанды ла ҡыйырһытмаған кеше ул. "Иң мөһиме - кешелек сифатығыҙҙы юғалтмағыҙ", тип өйрәтте атаһы уны һәм ҡыҙы Гөлмәрйәмде. Хәйбулла ағайҙың аңлауынса, кешелек сифаты - изгелек, ғәҙеллек, миһырбанлыҡ кеүек әҙәм балаһына ғына хас булырға тейешле иң күркәм һыҙаттарҙан торған сифат. "Насар сифат" тигән төшөнсәне танырға ла теләмәне ул. "Кеше сифаты кешелә йә була, йәиһә бөтөнләйгә булмай", тип һәр саҡ үҙенең фәлсәфәһенә төшөп китер ине. Бер өлкәлә лә махсус белеме булмаған, тик уҡый-яҙа ғына белгән, әммә ифрат та аҡыллы атаһының ошо фәлсәфәһе ҡанына һеңешеп үҫте уларҙың. Бер ҡасан да башҡаларға ҡатырғанып һүҙ әйтмәгән әсәһе хаҡында ла һағынып иҫкә ала. Кешегә ауыр саҡта ярҙам ҡулы һуҙыуҙы һәр әҙәм балаһының изге бурысы тип һанай ул бәләкәйҙән. Табип һөнәрен һайлауы ла уның ошо булмышына бәйле. Улының медицина институтында, ә ҡыҙының кулинария училищеһында уҡыуына шатланып бөтә алмай ине ғүмер буйы ауылда мал аҫрап, умартасылыҡ менән шөғөл иткән ата-әсәһе. Фитрат өйләнеп, дүрт-биш айҙан уҡ Рәхилә килендәре бәпәйләгәс тә, бер ни белгертмәнеләр. Сөнки балаларының эске эштәренә ҡыҫылыуҙың йәш ғаилә өсөн бер ҙә яҡшылыҡҡа алып килмәҫен белә ине улар. Тик ҡыҙҙары Гөлмәрйәм яҡты донъяны бик иртә ташлап китеүенә ныҡ ҡайғырҙылар. Күп тә тормай, үҙҙәре лә бер-бер артлы баҡыйлыҡҡа күсте. Ана шундай яҡшы кешеләргә тап килеү бәхетен насип иткән Рәхиләгә Аллаһы Тәғәлә.

Рәхилә шул көндө үк, иренең үтенесе буйынса улы эшләгән дауаханаға килде.

- Әллә берәй йомошоң бармы бында, әсәй? - тип һораны Ғәлимйән ғәжәпләнеп. Сөнки уның эш урынына әсәһе килгәләп йөрөгәне юҡ.

- Кисә һин операция яһаған берәҙәкте күрергә килдем, - тине әсәһе уйынлы-ысынлы һымаҡ итеп. Өйҙән алып килгән аҡ халатты сумкаһынан сығарып кейҙе.

- Китсе, әсәй... - Ғәлимйән, әлбиттә, ышанманы.

- Ысын, улым. Һин кисә әйткән билдәләре минең бер элекке танышымдыҡына оҡшаған...

- Әллә, улайһа... Реанимацияла ята ул. Әле аңына килмәгән. Теләһәң, инеп күр. - Ғәлимйән әсәһенә шкафтан медицина ҡалпағы менән маска алып бирҙе лә уны реанимация бүлегенә оҙатып килде.

Ауыҙынан сығарылып, аппаратҡа тоташтырылған көпшә аша яһалма тын алып ятҡан был ҡарттың ағарынған йөҙөнә ҡарап, таныш кешене төҫмөрләү әллә ни мөмкин дә түгел ине. Әммә юрған тышына сығып ятҡан уң ҡулының һыртындағы яҙыуы ныҡ ҡына хәтерендә ҡалған Рәхиләнең. "Миша" тигән яҙыуҙың баш хәрефе башҡаларына ҡарағанда, ни өсөндөр, киреһенсә, бәләкәйерәк итеп тә яҙылған ине...

- Таныныңмы? - тип һораны Фәрит.

- Эйе, тап үҙе, - тине әсәһе ауырыуҙың үлек йөҙөн хәтерләткән битенә тағы бер тапҡыр ҡарап алғас. Тын алдырыусы аппараттың "гармошка"һы тырышып-тырмашып был кешегә кислород өрә, гүйә, уны көсләп-көсләп артабан да йәшәргә өгөтләй...

- Ҡанын күп юғалтҡан, - тип тағы бер мәртәбә ҡабатланы Фәрит бүлмәһенә әсәһен эйәртеп ингәс. - Төндә запаста ятҡан бер литрҙай ҡанды ебәргәйнек. Әммә ул ғына, әлбиттә, бик аҙ. Ҡан биреү станцияһына заказ бирҙек. Уларҙың да һуңғы запасын ҡайҙалыр оло юл фажиғәһенә осраған әллә нисә кеше өсөн беҙҙән алдараҡ ҡына алып киткәндәр. Иң үкенеслеһе - был кешенең ҡаны бик һирәк осрай торған кире резусы дүртенсе группа. Станцияға резервтағы донорҙарҙы ашығыс саҡыртып, ҡан алып килтергәнсе, ҡан алыштырыусы шыйыҡсалар ебәреп торабыҙ инде. Әҙәм балаһы бер унмаһа, унмайҙыр инде, күрәһең. Бомж булып киткәнсегә ҡәҙәр яҡшы кеше лә булғандыр әле ул... Тик тормош юлында һәр төрлө уңышһыҙлыҡтарға осрап, ошо хәлгә тарығандыр...

Үҙенең эше буйынса, ифрат та йыш ҡына осрап торған һәр төрлө ауыр хәлдәге пациенттарының хәле тураһында әсәһе менән бер ваҡытта ла тиерлек бүлешмәгән улы был юлы, нишләптер, фәлсәфәгә төшөп китте. Йән тартмаһа ла ҡан тарта, тигәне шулдыр ҙа, бәлки...

- Улым, - тине Рәхилә бер аҙҙан ҡыйынһынған һымағыраҡ та итеп, - минең ҡаным тап кире резуслы дүртенсе группа...

- Ҡуйсы, әсәй, юҡты һөйләмә. Ҡанды ни, табырбыҙ әле, - асыуланғандай итте Ғәлимйән. - Минең һәр пациентҡа ҡан бирә башлаһаң...

- Был ағайың - минең элекке танышым, улым. Бер ваҡыттараҡ баш ҡалала уҡығайныҡ.

- Бер ваҡыттараҡ?..

- Эйе.

- Был ҡарт һинән кәмендә егерме йәштәргә оло ла баһа...

- Бер генә йәшкә оло ул...

- ...?

- Аллаһ хаҡы өсөн, улым. Бик тә йәл булып китте. Ҡана, хәҙер үк ҡанымды бирәйем. Ошо арала ҡан баҫымым да бер аҙ күтәрелеп тора... Үҙемә лә яҡшыраҡ булып ҡалыр.

Ғәлимйән әсәһе менән башҡаса һүҙ көрәштереп торманы. Уны ҡан алыу бүлмәһенә алып килде...

Рәхиләнең һүҙҙәре буйынса ауырыу тарихына исем-фамилияһын һәм башҡа етешмәгән мәғлүмәттәрҙе мөмкин тиклем тултырып яҙып ҡуйҙылар. Миша әкренләп шәбәйә лә башланы. Әлбиттә, уның йөрәгендә, бауырында һәм башҡа ағзаларында оҙаҡ йылдар буйы тәненән өҙөлмәгән алкоголь суррогаттары үтә лә тәрән эҙ ҡалдырған. Ул ғына ла түгел, психиатрҙың консультацияһында "...выраженная алкогольная деградация личности" тигән диагнозы ла бар. Ҡыҫҡаһы, "Унда ниндәй ауырыу юҡ?" тигән һорауға яуап биреүе хатта еңелерәктер ҙә...

Әсәһенең элекке танышы икәндән башҡа мәғлүмәтте, әлбиттә, Ғәлимйән белмәне. Үҙе лә төпләшеп, һорашып торманы.

- Әсәй, теге Миңсәит ағайҙы иртәгә дауахананан сығарабыҙ, - тине бер көн Ғәлимйән. - Танышыңды барып күреп ҡалғың килмәйме?

- Иртәгә?..

- Эйе, иртәгә. Мин, әлбиттә, уға һинең хаҡта бер ни ҙә өндәшмәнем. Сөнки элек ниндәй генә таныш, хатта дуҫ кеше булһа ла, берәҙәк халҡының уйында тик берәр йөҙ грамлыҡ, йә иһә берәр һиралыҡ аҡсанан башҡа нәмә булмай икәнен яҡшы беләм. Үҙенде йә аҡса фәлән һорап йөҙәтер...

- Дөрөҫ, улым, белмәүе хәйерлерәк...

* * *

Ҡабул итеү бүлегенә килеп ингән йәш егет үҙен Республика дауаханаһында эшләгән хужалыҡ машинаһы водителе итеп таныштырҙы.

- Яҡшығолов Миңсәит бөгөн сығамы? - тип һораны.

Өҫтәл артында ултырған шәфҡәт туташы ниндәйҙер журналды асып ҡараны.

- Эйе, бөгөн, - тине. - Һеҙ уның туғанымы?

- Юҡ, - тине егет, - мине беҙҙең дауахананың завхозы ебәрҙе. Бына ошо кейемдәрҙе лә бирергә ҡушты...

Өр-яңы спецовка кейгән Миша, аптыранғандай, үҙенең өҫбашын эйелеп-боролоп ҡарай-ҡарай килеп сыҡты. Ҡулында уның элекке алам-һолам кейеме һалынған пакет.

- Яҡшығолов Миңсәит һеҙ булаһығыҙмы? - тип һораны егет башҡортсалап.

- Ну, я, - тине Миша. - А в чем дело?

- Һеҙҙе машина менән килеп алырға ҡуштылар, - тине егет тә был юлы урыҫ теленә күсеп.

- Мин машина һораманым, - тине Миша. - Лучше берәр тәмәке бирһәң...

Егет Мишаға тәмәке биреп ҡабыҙҙы ла машинаһына ултырырға саҡырҙы. Тегеһе башҡаса бер ни ҙә өндәшмәне, әйткәнде үтәне...

Мишаның дауахананан сығып китеүен генә белде бүлек мөдире Ғәлимйән Фитратович. Уның артабан ҡайҙа барыуы менән әллә ни ҡыҙыҡһынманы. Дөрөҫөрәге, көн дә ауыр хәлдәге башҡа пациенттар менән мәшғүл булған хирургтың унан тыш та эше күп ине, дауаланып сыҡҡан һәр бер кеше менән ҡыҙыҡһынырға уның ваҡыты ла юҡ. "Теге ағай, меҫкен, әллә ҡайҙа киткәндер инде. Өйө лә, ғаиләһе лә юҡ. Бәғзе кешеләр ана шулай ғына йөрөп, кешелектән сыға ла, ғүмер буйына бер рәхәтлек күрмәй, ахырҙа, үҙҙәре лә юҡ булып ҡуя шул...." тип йәлләп кенә әйтеп ҡуйҙы әсәһенә. "Шулай шул, улым. Бер ни ҙә эшләп булмай..." тип уфтанды әсәһе.

Миңсәиттең артабанғы яҙмышын Рәхилә лә белмәне. Сөнки, тормош юлынан тамам аҙашҡан был әҙәм балаһын яңынан "кешелек доъяһына ҡайтарып" алырға, тигән үҙенең ниәтен, ни өсөндәр, әлегә ҡатынына ла, улына ла һөйләмәҫкә булды Фитрат Хәйбуллович. Уның уйына ҡаршы төшөрҙәр, тип уйланы, әллә ни... Абруйлы профессорҙың, әлбиттә, таныштары һәр ерҙә лә етерлек, шул иҫәптән, баш табиптың хужалыҡ буйынса урынбаҫары ла. Мишаны үҙҙәренең дауаханаһының пансионатына алып килеп урынлаштырыу хәстәрлеген тап уның менән һөйләшеп, алдан килешеп ҡуйғайны. Уларҙың килешеүе буйынса, Яҡшығолов Миңсәит, ауыр операциянан һуң, пансионатта ятып, реабилитация үтергә тейеш ине. Дөрөҫөрәге, профессорҙың үтенесе буйынса...

Пансионатҡа алып килгәс тә Мишаны ҡырындырып, сәсен киҫеп, бер аҙ нормаль кеше ҡиәфәтенә килтерҙеләр. Паспорт өсөн фотоға ла төшөрөп алып киттеләр. Архив аша Фитрат уның тыуыу тураһында таныҡлығын табып, паспорт мәсьәләһен дә хәстәрләне, тейешле органдар аша был меҫкендең ата-әсәһенең бер-нисә йыл элек үк донъя ҡуйғанлығын да белде. Ә Миша үҙе был хаҡта бер ни ҙә белмәй ине. Пансионаттағы кешеләр менән әллә ни һөйләшмәй, күп ваҡыт көндәр буйы карауатта һүҙһеҙ ятҡан берәҙәк ата-әсәһенең был донъяла юҡлыған белгәс тә, йөҙөнә бер ниндәй ҙә үҙгәреш-маҙар сығарманы, әйтерһең дә, уға күршеләрҙең бесәйе үлгән, тигән хәбәр генә еткерҙеләр...

Уның палатаһына йыш ҡына ингеләп йөрөгән профессорға Миша бик тә сәйер итеп ҡараған һымаҡ. Фитрат Хәйбуллович бер хәбәрҙе лә ыңғай ҡабул итмәгән Мишаға ғәжәпләнеп бөтә алмай.

- Бысағымамы миңә паспорт? - тине бер ҡасан да йөҙөндә йылмайыу күренмәгән Миша үҙенә тапшырылған документты ҡулында өйөрөлдөргәләп.

- Нисек инде - бысағыма?.. Һинең кеше булып йәшәүеңде теләйем, - тине күпте белгән, әммә берәҙәк психологияһын әллә ни өйрәнмәгән профессор.

- Мин - кеше. Әммә һеҙҙән паспорт һораманым...

Бына һиңә - мә... Берәҙәк тормошон өйрәнеүсе таныш психолог Эрнст Сәлимович менән кәңәшләшеп ҡарамаҡсы булды.

-Уйығыҙ изге, гуманлы, әммә файҙаһыҙға тырышаһығыҙ, Фитрат Хәйбуллович, - тине психолог. - Йәше илленән ашҡан ҙур стажлы бындай берәҙәкте хәҙер инде тура юлға алып сығыуы бик тә икеле. Һин уға алтын тауы алып килеп биргән хәлдә лә, тик бөгөнгө көн менән генә йәшәгән бындай әҙәмдең уйында барыбер берәй шешә хәмер, йә иһә һыра һәм бер аҙ закусканан башҡа нәмә булмай ул...

- Ә туғандарын табып, был хаҡта уға әйтеп ҡарағанда?..

- Туғандары хаҡындағы мәғлүмәт уны уғата ҡыҙыҡһындырмаясаҡ...

Шуға ҡарамаҫтан, Фитрат Хәйбуллович баш табиптың урынбаҫары аша Мишаға пансионат тирәһен һепереү эше хаҡында һөйләште. Эшләгән

дәүерҙә йәшәү өсөн оҙайлы ваҡытҡа торлаҡ мәсьәләһен дә килеште. Уға пансионаттың ҙур булмаған, әммә айырым бер бүлмәһен биреп торорға вәғәҙә иттеләр.

Йәшәү шарттары ҡырҡа яҡшырып, әҙәмсә ашап йөрөгән Миша тиҙ арала таҙарынып, ҡәҙимге кеше ҡиәфәтенә инә башланы. Хатта бер аҙ йәшәреп тә киткән һымаҡ. Әммә башҡалар менән аралашмаған, хатта телевизорҙан һәр төрлө ҡыҙыҡлы тапшырыуҙарға ла битараф булған Миша үҙен ситлектәге ҡош һымаҡ тоя ине, буғай. Көндәр буйы бер кем менән дә һөйләшмәй, карауатында ята бирә. Тик көн дә дежурҙағы шәфҡәт туташынан "Мине бынан ҡасан сығараһығыҙ? Әллә ҡасан уҡ һауыҡтым бит инде..." тип һорап йәҙәтә.

Бер көн Фитрат Хәйбуллович сираттағы мәртәбә Мишаның янына инде. Ҙур дәрәжәле кешенең берәҙәк хаҡында шундай ныҡ ҡайғыртыуына ғәжәпләнһәләр ҙә, был турала уға һорау биреүсе булманы.

- Ул ни үҙенең палатаһында, - тине дежурҙағы сестра профессорға. - Көн дә пансионаттан сығарыуҙы үтенеп ялҡытты...

Профессор палатанан башҡаларҙың сығып тороуын һораны. Икеүҙән-икеү ҡалғас, хәләхүәлен һорашҡанда бер-ике һүҙ менән генә "эйе" йә "юҡ" тип яуап биргән Мишаға үҙенең күптән әҙерләп йөрөгән һорауын бирмәк булды.

- Атай-әсәйеңдән башҡа туғандарың бар инеме? - тине Фитрат Хәйбуллович.

- Ғаиләлә мин бер үҙем инем, - тип яуап бирҙе Миша. - Туғандарым юҡ минең. Бомждың туғандары булмай...

- Ә балаларың?..

- Балаларым да, ҡатыным да булғаны юҡ. Бомждың балалары ла булмай, - тип әйтеп һалды Миша тағы.

- Хаталанаһың, Миңсәит Миңлейәр улы, - профессор ни өсөндер уға атаһының исеме менән өндәште. - Был донъяла һинең ғәзиз улың бар. Бик аҡыллы, ҙур кеше. Хирург. Һиңә операция яһап, ғүмереңде ҡотҡарып алып ҡалды...

Ошо һүҙҙәрҙе әйткәс, Фитрат Хәйбуллович ҡаршыһында ултырған был әҙәмдең күҙҙәренә текәлде. Шул күҙҙәрҙә кеше затына хас берәй ыңғай үҙгәреш булыр, тип өмөт итте. Әммә мәғәнәһеҙ, битараф ҡарашҡа юлыҡҡас, нишләргә белмәй, тегенең ҡулағына эйелә бирҙе.

- Ишетәһеңме, мине? - тине Фитрат Хәбуллович тауышын күтәреп.

- Слышу, не глухой...

- И что?..

- Ничего...

Әҙәм балаһының саманан тыш битарафлығына ныҡ тетрәнгән, асыулынған профессор, үҙен-үҙе тота алмай, сығырынан сығыр хәлгә килде. Быңдай хәлдә бер ҡасан да тиерлек булғаны юҡ ине уның.

- Дурак һин, вот что! - тине профессор тауышын тағы күтәрә биреп.

Улы хаҡында ишетеү менән был әҙәмдең ҡайҙалыр күңел төпкөләндә йәшеренеп ятҡан кешелек тойғоһо бер аҙ уянмаҫмы, тигән уй менән сискәйне бит уға ошо оло серҙе, әммә...

- Отстаньте от меня! Бер кемем дә юҡ минең һәм булыуын да теләмәйем! - тине Миша ла бер аҙҙан ҡәҙимге асыулана төшөп. - И вообще, что вы от меня хотите?

-Короче, - тине профессор үҙ телен генә түгел, унан тыш барлыҡ кешелек ҡиммәттәрен юғалтҡан был әҙәмгә. - Иртәгә һине эшкә урынлаштырырға киләләр. Үҙең йәшәгән ошо йорттоң тирә-яғын һепәрәсәкһең. Тейешенсә эш хаҡы ла түләйәсәктәр. Йәшәргә айырым бер бүлмә лә бирәсәктәр. Паспортыңды әҙерләп ҡуй...

- Подметать хотите заставить? Меня, высококлассного авиаинженера?..

Мишаның ҡасандыр хәтерендә ҡалған һөнәр исемен атауына, әлбиттә, профессор иғтибар итмәне. Туғандары, хатта улы хаҡындағы мәғлүмәт тә әллә ҡасан уҡ ташҡа әйләнеп бөткән бәғерен ҡуҙғата алмаһа ла, даими йәшәү урыны һәм үҙен туйҙырып торорлоҡ эш хаҡында ишеткән был берәҙәк уның һүҙҙәрен оло шатлыҡ менән ҡабул итерена ышана ине Фитрат Хәйбуллович.

- Әҙерләнеп тор, Миша. Иртәгә көндән башлап әҙәмсә йәшәй башлауға әҙерлән. Хуш.

* * *

Иртә менән пансионат бүлмәһенә ингән Фитрат Хәйбуллович Мишаның карауатында тәртипһеҙ рәүештә сисеп быраҡтырылған яңы спецовка, паспорт ятҡанын ғына күрҙе. Тик тумбочкаһындағы полиэтилен пакетта "ҡәҙерләп" тотҡан алама кейемен генә үҙе менән алғайны Миңсәит...

Ошоғаса психолог Эрнст Сәлимовичтың һүҙҙәренә лә әллә ни ышанып етмәгәйне профессор. Юлдан яҙған кешенең ҡасан да булһа берәй ваҡыт әҙәм рәтенә инеү мөмкинлегенә, кешеләрсә тормош башлаясағына өмөт итә ине. Инде үсеп етеп, үҙаны формалашып бөткән Ғәлимйәненә атаһы хаҡындағы ошо оло серҙе, бәлки, берәй заман асып бирерҙер, тип уйлап йөрөгәйне Фитрат Хәйбуллович. Әммә ошо минуттан алып үҙ уйынан һүрелде. Сөнки бындай ысынбарлыҡты белгән улы шундай атанан яралыуына тик ғәрләнәсәк кенә, тип фекерләне. Йәшәгән, уҡыған һайын, тормоштағы һәр төрлө хәлдәр менән күҙгәкүҙ осрашҡан һайын, үҙендә ифрат та аҙ белгәненә инана бараһың икән ул. Сәйер һәм үтә лә ҡатмарлы был тормош тигән нәмә... Хатта йырткыс тоҡомонан булған эт һәм бесәйҙәр ҙә үҙен һыйпағандарға, ашарға биргәндәргә яҡынлашыуҙы хуп күрә. Аңһыҙ тип һанаған ҡырағай кейектәргә тиклем дрессировкаға бирелеүсән. Ана шуларҙан айырмалы, Ер йөҙөндә иң аҡыллы булып һаналған йән эйәһе - әҙәм балаһы. Үҙенә күрһәткән кешеләрсә мөнәсәбәтте, изгелекте "Кеше" тигән юғары исем йөрөткән һәр кемдең уғата ла дөрөҫ ҡабул итеренә ышана ине Фитрат Хәйбуллович... Ошоғаса...

(Аҙағы).

АФАРИН!

# "ШҮЛГӘНТАШ" ФИЛЬМЫ...



## балаларға матур бүләк булды

**Томанлы иртә менән ат егеп, Шүлгәнташ яғына утынға китеп барыусы Ташбулат ҡарттың арбаһына ике ейәне - Урал менән Ҡусҡар һәм ейәнсәре Актояҡ та һаҡҡандар: олатайға ярҙамлашырға кәрәк бит, уларһыҙ эш барып сығамы ни! Малайҙар ҡайҙа ла малайҙар инде: тиктормаҫ һәм шаяндар - йә арбанан һикереп төшөп ҡалалар ҙа көрмәкләшеп китәләр, бер-берейһен ирештерәләр ҙә атты ҡыуып етеп, тағы арбаға һикерешәләр. Шунан арбаға салҡан ятып, күккә бағалар. Күк йөҙө ус хәтлем генә күренә, унда, юғарыла, меңйәшәр ағастар баштарын сайҡап, ике малайҙың шуҡлығын күҙәтә, ә тағы ла бейек-бейектә Шүлгәнташ ҡаяһы диңгеҙҙә йөҙөүсе айсбергты хәтерләтеп ҡуя. Ю-у-ҡ, айсберг ише генә ти, һиңә, ул мәмерйә! Ундай мәмерйәнең бит донъяла ише юҡ, ти, ана Ташбулат олатай ҙа. Урал әле бәләкәй булһа ла, был хаҡта бик күпте ишеткәне бар. Шуға ла, Шүлгәнгә яҡынлаша барған һайын, кескәй генә йөрәге ярһыбыраҡ тибә, аңлатҡыһыҙ тантана ла, бер аҙ шом да биләй күңелен...**

Ә Ҡусҡар тота ла уны, ҡурҡаҡ, тип ирештерә. Гел шулай ти, "Ҡурҡаҡтарҙы ниңә нығыраҡ ярата тар икән?" тип, Ташбулат олатаһына ла төрттөрөп ала. Шундай малай инде ул, уйлап-нитеп тормай... Уның ҡарауы, олатаһы гел яҡлаша Уралды. "Ҡурҡҡанда ла кеше булып ҡалырға, хайуанға әйләнмәҫкә кәрәк, ҡурҡыуҙы еңеп була ул", тип дәртләндерә ятраҡан ейәнен. Бына барып ҡына етһендәр әле, күрһәтер Урал Ҡусҡарға ҡурҡаҡты!

...Сәмләнеүе һуңғы сиккә еткән Урал, үҙ-үҙен еңеп, башҡалар күрмәгәндә генә Шүлгәнташ мәмерйәһенә инеп китә лә, һыуға сумғандай, ыпсыһын әкиәт донъяһына килеп эләгә. Юҡ-юҡ, артабан бер ни ҙә һөйләмәйем, юғиһә, тиҙҙән БСТ каналында буласаҡ премьераһын ҡарау бигүк ҡыҙыҡ та булмаҫ үҙегеҙгә, 1 июнь 22 сәғәттә уны тулыһынса тамлап тороп ҡарарһығыҙ, ярайһы? Ә кемгә бәхет йылмайҙы - улар бер нисә көн элек кенә БР Президенты грантына "Тамыр" балаларүсмерҙәр телеканалы төшөргән был башҡортса фильмды Өфөнөң "Родина"кинотеатрында тамаша ҡылды. Ул баш ҡалабыҙ балалары тормошонда сағыу бер байрамға әүерелде. Кинотеатр фойеһында кескәйҙәр өсөн төрлө уйындар ойошторолдо, улар тәмлекәстәр менән һыйланды, шулай уҡ "Шүлгәнташ сере" фильмында төп ролдәрҙе башҡарған кескәй артистар менән аралашты. Бына хәҙер инде уҡыусыбыҙҙы улар менән таныштырырға ла ваҡыт етте.

- Миңә Урал ролен башҡарыуы бик ҡыйын булманы, сөнки кинонды төшөргән ағайҙар һәм апайҙар, был образ һинең үҙеңдең холҡоңа тап килеп тора бит, тинеләр, - тип һөйләне төп ролде башҡарыусы Рөстәм Төхфәтов тигән асыҡ йөҙлө, һөйкөмлөкле был бала. Ул Өфөнөң Ф. Мостафина исемендәге 20-се башҡорт ҡала гимназияһында уҡый, әле бына 4-се класты гел "бишле"гә генә тамамлаған икән. "Урал фильм аҙағына мәмерйәнән бөтөнләй икенсе кеше булып сыға, - тип дауам итә һүҙен Рөстәм.- Сөнки ул мәмерйә серҙәрен төшөнә, унда яуыз дошмандарға ҡаршы көрәшкән башҡорт батырҙары менән осраша, уларҙың рухы малай йөрәгенә күсә".

Уралды һәр саҡ ҡурсалап, уға ҡыйыулыҡ өҫтәп, дәртләндереп торған аҡыллы ҡыҙыҡай Актояҡ образын иһә баш ҡалабыҙҙың М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһынан 3-сө класс уҡыусыһы Назгөл Шәрәфетдинова башҡара. "Киноға төшөү бик оҡшаны, уны төшөрөүсе апайҙар һәм ағайҙар беҙҙе хәстәрлеклә, ҡәҙерләп кенә алып йөрөттөләр, шуға ла унда әсәй-атайҙарыбыҙ бармаһа ла, күңелһеҙләнергә бер сәбәп тә, хатта быға ваҡытыбыҙ ҙа булманы", ти ул. Назгөл Шүлгәнташ мәмерйәһен күрергә күптән хыялланған, ләкин был хыялының шулай тиҙ, әкиәттәгесә килеп сығырын башына ла килтермәгән. "Үҫкәс артист булырға хәл иткәнһеңдер инде?" тигән һорауыма ул "Эйе", тип яуап ҡайтарманы илла. Был иһә Назгөлдең күп яҡлы ҡыҙыҡһыныуҙары һәм мөмкинлектәре барлығына, шулай уҡ киноләғы образына оҡшап, изге күңелле булыуына ишара ине. "Бәлки, әсәйем кеүек, юрист булырмын. Врач булырға ла теләйем", тине ул.

Ҡусҡар роленең үҙенсәлекле характерын Өфөнөң М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт гимназияһының 7-се класын тамамлаған Данир Ғимаҙиев бик оҫта итеп асыуға өлгәшкән. Ҡусҡар шаян, шуҡ, тиктормаҫ, шул уҡ ваҡытта ул гел ғәҙелде генә һөйләп, гел изгелек кенә эшләп тә йөрөмәй. Шуғалыр ҙа, күрәһең, матбуғат конференцияһында Данир журналистарҙы, "Һеҙ мине лә шундай икән, тип уйлай күрмәгеҙ, тормошта мин бөтөнләй икенсе", тип көлдөрөп тә алды.

Ғөмүмән, йәш артистарҙы тиҫтәләгән балалар араһынан образдарға бик тура килтереп һайлай алған режиссерҙар. Был да ижади төркөмдөң оҫталығы тураһында һөйләүсе факт. Әйткәндәй, башҡортса әкиәтте төшөрөүҙә "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының иң һәләтле белгестәре ҡатнашҡан: режиссерҙар Рөстәм Аҙнабаев, Ләйсән Солтанғолова, ҡуйыусы оператор Урал Ғатауллин, сценарий авторы Гөлназ Ҡолһарина, рәссамдар Арыҫлан Бикбаев һәм Альбина Шәһретдинова, композитор Айҙар Хәмзин һәм башҡалар. Аңлашылыуынса, картина шөһрәтле тәбиғәте менән дан тотҡан Бөрйән районында төшөрөлгән. Әйтергә кәрәк, тап ошо фактор фильмдың төп уңышын хәл иткән дә инде. Әкиәт донъяһына тиң Бөрйән тәбиғәте кинофильмға боронғолоҡ ауаҙы өҫтәй, тантаналы бер серлелек төҫмөрө бирә, таш быуат серҙәрен һаҡлаған был мәмерйәнең эске күренештәре, стеналағы мамонт һүрәттәре балалар күңелендә фантазия уятып, триллер стилендәгесә, төрлө мистик иллюзиялар тыуҙырырға булышлыҡ итә. Ә әкиәт өсөн шунан да отошлораҡ тағы ни бар инде! Сценарий авторы Г. Ҡолһарина әйтеүенсә, әкиәт башҡорт халыҡ ижады мотивтарына ҡоролған үҙаллы әҫәр. Урал образының ошо уҡ исемдәге мәшһүр эпосыбыҙ геройы менән ауаздашлығы һиҙелә бирһә ҡуйһа ла, ниндәйҙер параллелдәр үткәреү үҙмаҡсат итеп ҡуйылмаған, ләкин әҫәрҙең башынан аҙағынаса геройҙарҙы үлемһеҙ Урал батыр рухы оҙатып йөрөй, ул балаларҙы аҡыллы һәм ҡыйыу булырға, яуызлыҡтарға ҡаршы көрәшә белергә, изгелеккә, яҡшылыҡҡа һәм яҡтылыҡҡа өндәй, дәртләндерә. Шул уҡ ваҡытта балалар өсөн был фильм Башҡортостаныбыҙҙың иң күркәм һәм боронғо биләмәһендә төшөрөлгән икән, уның сюжет һыҙығы әкиәткә ҡоролған икән, әҫәр башынан аҙағынаса әлеге "халыҡ ижады мотивтары" менән һуғарылырға тейеш булғандыр: ул кейеҙ костюмдар, торна, башҡорт батырҙары образдары һәм башҡа шундай айырым деталдәр менән генә сикләнмәйенсә, халыҡ аҡылын да, телмәр байлығын да, башҡорт моңҡөйҙәрен дә бала аңына барып етерлек кимәлдә, халҡыбыҙ тарихы һәм рухиәте хаҡында киңерәк төшөнсә биреп һүрәтләгәндә, былар бөтәле лә әҫәрҙе милли сәнғәтебеҙҙең тағы бер өлгөһө итеп күтәрер генә ине.

Ғөмүмән алғанда, "Шүлгәнташ сере" фильмы Мәҙәниәт йылында балаларға бына тигән бүләк, ҙур ваҡиға булараҡ ҡабул ителде. Киләсәктә фильм рус һәм инглиз телдәренә лә тәржемә ителәсәк.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.

ИНТЕРНЕТТАН



# КОМПЬЮТЕР...

## хәтергә зыян итә

■ Балалар һәм үҫмерҙәр шәкәрҙе көндәлек нормаһынан күберәк ҡуллана. Төрлө емеш-еләк һуттарында организм өсөн кәрәкле матдәләр булһа ла, уларҙың бөгөнгө заман кешеһенең сәләмәтлегенә зыяны ла бар. Мәҫәлән, уларҙа шәкәр күп, шуға ла балаларға һәм үҫмерҙәргә күпләп һут эсеү диабет, һимерәү хәүефе менән янай. Статистика күрһәтеүенсә, 11-19 йәшлек балалар һәм үҫмерҙәр ҡулланған шәкәр норманан 42 процентҡа артығыраҡ. Төп шәкәр сығанағы булып емеш һуттары, татлы газлы эсемлектәр, печенье, пирожныйҙар тора. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы иҫкәртә: көнөнә 6 балғалаҡтан артыҡ шәкәр ашарға ярамай.

■ Ҡояш нурҙары тәьҫире һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән D витамины сәләмәтлек өсөн мөһим. Швеция ғалимдары билдәләүенсә, ҡояшта йөрөү ҡояштан ҡасып бүлмәлә ултырыуға ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Каролинск институты белгестәре 20 йыл дауамында үткәргән тикшеренеүҙәренә таянып, түбәндәге һығымтаға килгән. Ҡояшта булырға яратмаусылар араһында үлем күрһәткесе ике тапҡырға юғары булып сыҡҡан. Ғалимдар аңлатыуынса, D витамины дефициты сәләмәтлеккә насар йоғонто яһай.

■ Организмға А витамины етешмәһә - күреү һәләте түбәнәйә, В витамины етмәһә, йоҡоһоҙлоҡ йонсота. Арыу, иғтибар туплай алмау, юҡ ҡына сәбәптән дә ҡыҙып барыу, аппетит булмауы - былар барыһы ла авитаминоз тураһында һөйләй. Ә ниндәй витамин етешмәүе тураһында шундай билдәләр буйынса белергә була. А витаминына ҡытлыҡ кисерһәгеҙ, күҙҙәр насар күрә башлай, тире кибә. В витамины етешмәһә, йоҡлап булмай, кәйеф тә йыш үҙгәреп тора. С витамины организмдың дөйөм тонусы өсөн яуаплы. Тәндең бәрелгән урыны күгәреп барһа, теш ҡаҙналары ҡанаһа, яралар насар йүнәлһә, тимәк, һеҙгә С витамины етешмәй. Һөйәктәр һыҙлаһа, тештәр һәм тырнаҡтар торошо насарайһа, D витамины кәрәк. РР витамины етешмәгәндә тире насарая, кибә, тән тартыша.

■ Көнөнә 3 сынаяҡ ҡара сәй эсеү юғары ҡан баҫымы сире, шулай уҡ инсульт һәм инфаркт барлыҡҡа килеүҙе түбәнәйтә. Сәйҙәге флаваноидтар ҡан күҙәнәге структураһын яҡшырта, майҙарҙың яныуына булышлыҡ итә, дөйөм ауырлыҡтың кәмеүенә килтерә. Әшегеҙ компьютер менән бәйле булһа, сәйҙе баллап эсегеҙ. Табиптар фекеренсә, бал компьютерҙың зарарлы тәьҫирен түбәнәйтә. Бигерәк тә ҡандала үләне йәки йүкә балы яҡшы. Балдың был төрҙәре тын юлдары ауырыуҙары, йоҡоһоҙлоҡтан йонсоғанда, баш, йөрәк ауыртҡанда файҙалы.

■ Электрон ҡорамалдарҙағы мәғлүмәт хәтерҙә һаҡланмай. Принстон университеты тикшеренеүселәре раҫлауынса, ҡулдан яҙылған мәғлүмәт компьютерҙа баҫылғанына ҡарағанда яҡшыраҡ хәтерҙә ҡала. Был хәтерҙе нығытыу процесының иң ҡулайлы юлы. Әгәр ҙә нимәнелер ятларға теләһәгеҙ, ябай ҡағыҙ һәм ручка ҡулланып, уны яҙып ҡуйыу ҙа етә. Ғалимдар билдәләүенсә, белем алыу учреждениеларында заманса ҡоролмаларҙы ҡулланыуҙың ошондай кире яҡтары ла бар.

# АЛМА АҒАСЫНАН АЛЫҪ ТӨШМӘЙ,

## йәғни Ер йөҙөндә үҙенең геномында нәҫелдән күсеүсе ниндәйҙер сирҙең мутацияһын йөрөтмәгән бер генә кеше лә юҡ

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**▸ Имеш, балаға интеллект - әсәнән, ә ҡалған бөтөн нәмә атайҙан бирелә, тиҙәр. Был ысынбарлыҡҡа тап киләме?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, әлегә тиклем интеллект гены табылмаған. Бәлки, улар бик күптер, геномда гендар дөйөм алғанда 25-30 мең икән, бәлки, улар араһынан бик күп ген интеллект өсөн яуап бирәләр. Йәғни был - күп факторлы билдә. Һәм был генды күпме генә эҙләмәһендәр, улар бик күп һәм исемлек ахырынаса тәҙәлмәгән. Хатта генийҙарҙы ла тикшереп ҡарайҙар, әммә бынан бер ниндәй һығымта ла яһау мөмкин түгел. Шуға күрә, балаға интеллект әсә яғынан тапшырыла, тигән фекер бары тик фекер генә булып ҡала, ә фәнни яҡтан раҫланмай.

**▸ Һеҙҙең эшмәкәрлек билдәле антрополог Ринат Йосопов менән хеҙмәттәшлектә үрелеп барҙы...**

- Эйе, уҙған быуаттың 80-се йылдарында, Волга-Урал төбәгенең генетик популяцияһын, бигерәк тә башҡорттарҙы өйрәнә башлағанда, фин ғалимдары менән берлектәге экспедицияға Ринат Мөхәмәт улы менән сыҡтыҡ. Башҡорттарҙың генетик тарихын, популяцияһын ҡан төркөмдәре буйынса тикшерҙек. Ул саҡта ДНК кимәлендә тикшереү юҡ ине әле. Яңы ысулдар барлыҡҡа килгәс (геномдың анализы, ДНК анализы), беҙ уның менән ҡабат экспедицияларға бергә сыға, халыҡтың ҡанын тикшереүгә алып, унан ДНК-ны айырып, популяцияларҙың генетик тарихын гендар кимәлендә тикшерә башланыҡ. Бик күп берлектәге баҫма материалдарыбыҙ ҙа донъя күрҙе.

Волга-Урал төбәгендәге популяцияларҙың генетик тикшереү һөҙөмтәләре - ҡан төркөмдәре һәм ДНК кимәлендәге тикшеренеүҙәрҙең, нигеҙҙә, берҙәй һөҙөмтәгә тап килеүе генетик тарихта тағы ла нығыраҡ аныҡланған картина барлыҡҡа килтерә. Әммә әлегә аныҡ һығымта яһау мөмкин түгел. Сөнки беҙ хәҙер айырым гендарҙы тикшерәбеҙ. Хатта шундай кимәлгә еттек - гендарҙың 650 мең полиморф вариантын өйрәнәбеҙ. Ә улар бик күп, әлеге ваҡытта 50 миллион варианты билдәле. Йәғни гендар 25-30 мең, ә һәр гендағы варианттар һаны бик күп. Барлыҡ популяцияларҙа ла 50 миллион вариантты өйрәнеү өсөн бөтөн геномды тулыһынса уҡырға кәрәк. Шул ваҡытта ғына беҙ популяциялар араһында ниндәй генетик структура, ниндәй генетик яҡынлыҡ, ниндәй генетик тарих булыуын, ҡасан барлыҡҡа килеп, ҡасан был территорияға күсенеүҙәрен һ.б. ышанысл раҫлай аласаҡбыҙ. Ә әлегә 650 мең варианты уҡыу ярҙамында ниндәй мәғлүмәт алғанбыҙ, шуларҙың һөҙөмтәһе хаҡында ғына һөйләйбеҙ.

Мәҫәлән, Волга-Урал төбәгендәге популяциялар араһында, башҡорттар монголоидыраҡ (50 процент азиат компоненты), мордва популяцияһы европеоидыраҡ. Башҡорттар Урта Азия һәм Себер популяцияларына оҡшаш, ә мордваларҙың популяцияһы рустарҙың, украиндарҙың популяцияһына тартым, ә бына сыуаштар, удмурттар ошо популяциялар араһында ниндәйҙер арауыҡ торошонда тора. Бынан тыш, барлыҡ төрки халыҡтары, төрки теллеләр, Волга-Урал төбәгендә йәшәүсе башҡорт, татар, сыуаштар ғына түгел, Ә Урта Азияла, Себерҙә, Кавказда, Балканда йәшәүселәр - улар барыһы ла Көньяҡ Себер сығышлы. Йәғни беренсе тапҡыр төрки халҡы Көньяҡ Себер, Монголия территорияһында барлыҡҡа килеп, һуңынан ғына Европаға табан күсенә башлаған. Һәм был яҡынса беҙҙең эраның VI - XI быуаттарына тура килә. Күсенеү юлында улар урындағы халыҡтар менән осраша һәм урындағы компонент менән ҡушылып, Көнбайышҡа үткән һайын азиат компоненттын юғалта бара. Популяцияларҙың ҡатын-ҡыҙ өлөшөн һәм ир-егет өлөшөн айырым өйрәнеү мөмкинлеге лә бар. Сөнки метхандриаль ДНК бары тик әсә яғынан ғына тапшырыла. Метхандриаль ДНК-ны өйрәнеп, ҡатын-ҡыҙ тарихының нисек булыуын тикшерергә мөмкин. Ә *Y*-хромосоманы өйрәнеп, ир-ат тарихының нисек булыуын күҙалларға була. Шуныһы ҡыҙыҡ, ҡатын-ҡыҙ линияһы буйынса азиат компоненты нығыраҡ һаҡланып ҡалған.

Ринат Йосоповтың был донъянан иртә китеүе бик йәл. Күпме эшләнмәгән эштәр ҡалды. Лабораторияла тикшеренеүҙәр үткәргәндән һуң, һөҙөмтәләрен алғас, уларҙы этнография, антропология күҙлегенән баһалау өсөн гелән Ринат менән фекер алыша, кәңәшләшә торғайным. Ә инде генетика һөҙөмтәләре краниологияныҡы (кеше һәм хайуандарҙың баш һөйәген өйрәнеү) менән тап килһә, ҡыуанысыбыҙҙың сиге булмай ине. Әлбиттә, бик үкенесле: Ринат Мөхәмәт улының яҙылған докторлыҡ диссертацияһы яҡланмай ҡалды, бик күп ҡулъяҙмалары донъя күрмәне. Һуңғы тапҡыр, мин ҡайҙалыр командировкала саҡта, Ҡаҙағстандан бер сумка бороңғо һөйәктәр алып ҡайтып ҡалдырған һәм ДНК тикшереүе үткәреп, тарихты тергеҙергә, һөйәктәрҙең кемдеке булыуын, күҙалланған нәҫелдәре менән уртаҡлыҡтары бармы икәнен асыҡлауҙы үтенгән (мәғлүм булыуынса, Ринат Йосопов был һөйәктәрҙе Ҡараһаҡалдыҡымы икәнлеген асыҡларға теләгән. - **Авт.**). Ринат Мөхәмәт улы вафат булғас, был тарихтың осон таба алманым, хатта был һөйәктәрҙе тикшерергәме, юҡмы икәнлеген дә белмәйем, ҡыҙыҡһыныусы ла юҡ.

**▸ Һуңғы йылдарҙа ҡан буйынса гаплотөркөмдәрҙе билдәләү йәмғиәтте тағы бер тапҡыр ғәфләт йоҡоһонан уятып алды, тиергә мөмкин...**

- Гаплотөркөм - шул уҡ генетика ул. Бының өсөн ҡандан ДНК-ны айырып алалар һәм айырым өйрәнәләр. Йәмғәтселек шаулаған *R1* һәм *R2* гаплотөркөмдәре буйынса төрлө фекерҙәр бар. Әммә генетиктар өсөн был яңылыҡ түгел. Метхандриаль гендарҙы беҙ бынан 20 йыл элек тикшергәйнек инде. Ә *Y*-хромосомалар буйынса минең бер хеҙмәткәрем диссертация яҡланы һәм ул интернетҡа сыҡҡас, барыһы ла уның эшенә һылтана башланы. Беҙ, ғәмәлдә, ваҡыттан саҡ ҡына алдараҡ барабыҙ һәм ниндәй генә яңылыҡтар йәки асыштар булһа ла, иң тәүҙә сит ил баҫмаларында баҫылабыҙ, сөнки беҙгә абруйлы журналдарҙа сығыш яһау зарур, грант алыу-алмауыбыҙ тап шуға бәйле лә инде. Башҡортостанда иһә күпмелер ваҡыт үткәс кенә баҫылабыҙ йәки интернетҡа сығабыҙ. Йәғни беҙ хәҙер сит илдә донъя күргән мәҡәләләргә баҫым яһайбыҙ, грант яуларға, тикшеренеү эштәрен артабан дауам итер өсөн аҡса алырға тырышабыҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, республикала йәки Рәсәйҙә институттың ниндәйҙер ҙур эшенең шандауы ғына яңғырай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Генетиктарҙың халыҡ-ара конгрестарында даими ҡатнашҡан һәм һәр ваҡыт докладтар менән сығыш яһаған, Германия, Төркиә, Венгрия, Финляндия, Италия, Португалия, Канада, Австралия, Ҡытай, Франция һ.б. илдәрҙә тәжрибә уртаҡлашҡан, Амстердамдағы Кеше генетикаһының Европа йәмғиәте, "Кеше геномы" халыҡ-ара йәмғиәте (Лондон) ағзаһы, лабораторияһы Рәсәй Фәндәр академияһының биш маҡсатлы финансланыусы программаһында грант яулаған әңгәмәсем Эльза Камил ҡыҙы: "Генетика - төрлө күҙаллауҙар ихтимал булған фәндәргә ҡарағанда көслөрәк. Әммә әлеге ваҡытта күпме өйрәнелгән, тикшерелгән, шул күләмдә генә һығымта яһарға мөмкин. Икенсе йылға картина бөтөнләй икенсерәк булыуы ихтимал. Сөнки кеше геномында һаҡланған мәғлүмәтте уҡыуыбыҙҙы дауам итәбеҙ. Бары тик шуны ғына ныҡлы ышаныс менән әйтергә мөмкин: кеше яралғанда уҡ уның ДНК-һына нисек тыуыуынан алып, нисек йәшәп, нисек баҡыйлыҡҡа күсергә тейешлеге хаҡында барлыҡ программа һалынған. Ләкин халыҡта "Хоҙайға ышан, тик үҙең дә ауыҙ асып йөрөмә", тигән әйтем дә бар. Бөгөн генетик тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә кешенең бирешеүсәнлек, мутация һ.б. гендарын асыҡлап, уның тормошона үҙгәрештәр индерергә, сәләмәтлеген һаҡларға, ғүмер оҙайлығын арттырырға мөмкин", - тигәйне. Тимәк, һау балалар, сәләмәт милләт, ауырыуһыҙ йәмғиәт хыял ғына түгел, бары тик ил, дәүләт етәкселегенең уны тормошҡа ашырырға теләге һәм мөмкинлеге булыуы ғына шарт...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

ҺАБАҠТАР

# БЕР ТОРМОШ - ИКЕ ЯҘМЫШ



## Буш шешәнең урыны сүплектә

Үҙенең аяғына үҙе эләгеп саҡ атлаған, дөрөҫөрәге, ҡултыҡ таяғы булмаһа, бөтөнләй алға бара алмаған ирҙе һуңғы ваҡытта йыш күрәм. Беҙҙең өй ҡаршыһындағы магазинға һыра алырға йөрөй ул. Бына әле лә кибеттән сығыу менән һыраһын ишек тотҡаһына терәп асты ла, шунда уҡ бер нисә йотом уртланы, аҙаҡ уны кеҫәһенә тығып, алан-йолан ҡаранып алды ла, бер аяғына һылтаңлай-һикерә, беҙҙең тәҙрә ҡаршыһындағы эскәмйәгә килде, шешәһен яңынан ауыҙына терәне. Йәйге селләлә һыуһыҙ йонсоған юлсы һымаҡ ҡомһоҙланып, бер тынала эсте лә, буш шешәгә ҡарап, байтаҡ уйланып ултырҙы. Шунан уны эскәмйә артындағы ҡыуаҡ төбөнә ырғытты, һаман күҙен шешәнән алманы. Моғайын, ул үҙенең тормошон да ошо төҫһөҙ һәм буш шешәгә оҡшатҡандыр. Шайтан ҡотҡоһона бирелеп, эскегә һалышҡас, уны ла яҙмыш елдәре кәрәкмәгән әйбер һымаҡ сығарып ырғытты бит. Буш шешәнең дә, уны бушатҡандың да урыны сүплектә, тип юҡҡа әйтмәгәндәр инде.

Рәзиф ағайҙың да магазин кәштәһендәге ошо күбекле эсемлек һымаҡ дәртле, шәп, матур саҡтары бар ине. Эшендә лә маҡтаулы булды, ғаиләһе лә күркәм ине. Тәү ҡарамаҡҡа ғына кәре бөткән, хәлһеҙ ҡарт кеүек күренә ул, ысынында иһә, алтмыш йәшкә лә етмәгән. Күп эсеүҙән ҡан баҫымы ныҡ күтәрелеп, мейеһенә ҡан һауғандан һуң, бит мускулдары шулай йәмһеҙ булып ҡатып ҡалған да, йөҙөн сирылтып, йыйырсыҡ баҫҡан кеүек күренә.

Мин дә уның типһә тимер өҙөр сағын яҡшы хәтерләйем. Беҙ йәшәгән ятаҡханаға ҡаршы йортта ғына йәшәй ине. Уға ул ваҡытта 30-35 йәштәр самаһы булғандыр. Һәр көн иртән яҡшы итеп үтекләнгән ап-аҡ күлдәктән эшкә китер, уны оло йәштәге әсәһе, ҡатыны, ҡыҙы подъездан сығып уҡ оҙатып ҡалыр ине. Водитель булып эшләгәс, ҡул аҫтында һәр ваҡыт машинаһы булды. Ял көндәрендә яҡындарын eләк-емеш йыйырға йөрөттө, йылға буйына тәбиғәткә алып сыҡты. Эштән ҡайтҡанда уның ҡулы бер ҡасан да буш булмай ине, уйын майҙансығындағы балаларға ла берәй тәмлекәстән өлөш сығармай, береһен күтәреп яратмай инеп китмәй ине.

Тик Рәзиф ағайҙың бәхетле тормошо, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, оҙаҡҡа барманы. Билдәле булыуынса, туҡһаныңсы йылдар башында Рәсәй тарихында яңы бит асылды: иҡтисад ҡына түгел, кешелек ҡиммәттәре лә ҙур үҙгәреш кисерҙе ул заманда. Кемдер бер айҙа ҙур байлыҡҡа эйә булды, ә икенселәр тәүлек эсендә ғүмер буйы йыйған мөлкәтенән яҙҙы. Финанс пирамидалар, секталар, бандит ойошмалары барлыҡҡа килде. Эш хаҡы тотҡарланды, магазин кәштәләре бушаны. Бына ошо һынылыш осоронда берәүҙәрҙә яңы маҡсаттар барлыҡҡа килде, икенселәр, киреһенсә, төшөнкөлөккә бирелде. Бөтә нәмәгә тик тырыш хеҙмәт менән генә өлгәшеп була, тип йәшәгән Рәзиф ағай ҙа, бик күптәр һымаҡ, күңел төшөнкөлөгөнә бирелде. Көн һайын эшенән ҡыҙмаса булып ҡайта башланы. Тиҙҙән эшенән ҡыуылды. Эскән кеше менән кемдең йәшәгеһе килһен, ҡатыны ла ҡыҙын алып тыуған яҡтарына ҡайтып китте. Әсәһе лә юлдан яҙған улы менән оҙаҡ йәшәй алманы - йөрәк өйәнәге менән түшәккә ятты.

Әсәһен ерләгәс, байтаҡ эсмәй йөрөгән ул, әммә шайтан ҡотҡоһона бер бирелгән ир оҙаҡҡа бармаған - тағы эскегә бирелгән. Бына шул ваҡытта инде эскелектән ағыулынған ирҙе фалиж һуҡҡан. Әле ул кеше көнлө, ситтәр ярҙамынан тыш йыуына ла, ашарға бешерә лә алмай. Һыра шешәһен асырлыҡ ҡына көсө бар уның...

## Бәхет формулаһын үҙеңә табырға

Уның шешәләш дуҫтары араһында беҙҙең күрше лә бар ине. Раил ағайҙы бер нисә тапҡыр саңғы юлында ла күргәнем бар булды. Тәүҙә, бәлки, ул түгелдер, тип уйлағайным. Күптән түгел уның спорт кейемендә үҙәк урам буйлап йүгереүен күреп ҡалдым. Ауыҙын йырып, әллә ҡайҙан, күршенән һалдырып, ҡысҡырып килә. Хәл-әхүәл белешкәс:

- Ҡартайған да тыртайған, тиҙәрме әле - ологайған көндә спорт менән шөғөлләнә башланым әле. Бөтә ауыртыу-һыҙланыуҙарым бөтөп ҡалды. Спорт - бөтә сирсырхауҙан дауа икән, һеңлем. Ҡан баҫымым да нормалләште, йөрәк тә урынына ултырҙы, аппетит та егеттәрсә, - тип шаяртып алды.

Рәзиф менән йәштәш үк булмаһа ла, йәш айырмаһы ике-өс йылдан ашмағандыр уларҙың. Икәүләшеп ҡосаҡлашып йөрөп эсә инеләр. Береһенең ҡатыны ҡыуып сығарһа, икенсеһендә ҡундылар, унда ҡабул итмәһәләр, коридорҙа ятып йоҡларға ла тартынманылар. Улар аша атлап эшкә киткән ваҡыттар бер тапҡыр ғына булмағандыр.

Эшләгән ойошмаһы тарҡалғас, Раил ағай ҙа эш-шөғөлһөҙ ҡалды. Шуны ғына көткәндәй, ҡатыны уны ауылда яңғыҙы көн күргән әсәһе янына алып ҡайтты ла китте. Тәүге балалары тыуыштан зәғиф ине, уға саф һауа, яҡшы аҙыҡ кәрәк, тип һылтауланы ҡатыны. Замана елдәре ул мәлдә әле ауыл хужалығына бик ҡағылмағайны, шуға ла алтын ҡуллы күршемә шунда уҡ эш тә табыла. Дәртләнеп кенә эшләп йөрөгәндә, тәүҙә электр энергияһына бурыс күп тип, шунан башҡа мең төрлө төрлө сәбәп табып, колхоз юҡҡа сыға. Раил ағай тағы эшһеҙ ҡала, бында ла шешәләш дуҫтар табыла. Эскелек арҡаһында ике йыл төрмәлә лә ултырып сығырға тура килгән уға.

Ҡайтҡас, туйғансы бер эсәм дә, башҡа ауыҙыма ла алмайым тип һүҙ биреп сыға ул үҙенә, әммә ауыҙына бер эләккәс, ташлай алмаған. Икенсе балалары ла ауырыу булып тыуып үлгәс кенә аңына килгән.

-Үле баламды күтәреп, ҡатыным дауаханан ҡайтҡанда ла иҫерек инем әле. Күм-күк булып тыуған сабыйымды күкрәгемә ҡыҫып, атайым нәҫелен ҡалдырырлыҡ та хәлем юҡ икән, тип илағаным хәтерҙә, - ти ул, эсеүеңде нисек ташланың һуң тигән һорауға. - Тәүге баланың ауырыу булып тыуыуына ла үҙем ғәйепле булһам да, һәр ваҡыт ҡатынымды битәрләй инем. Илай-илай унан ғәфү үтендем, башҡа эсмәҫкә ант иттем. Быға тиклем дә бик күп тапҡыр тәүбәгә килеп, вәғәҙәләр биреп тә, береһен дә үтәмәһәм дә, ҡатыным был юлы ла миңә ышанды. Минең башҡа араҡыға үрелмәүемә генә түгел, тағы ике-өс балаға ғүмер биреүемә, яңынан бына тигән тормош ҡороуыма иманды. Шуның өсөн уға бик рәхмәтлемен. Тыуып, яҡты донъяны күрмәй ҙә үлеп киткән бәләкәй генә кешенең үлеме ныҡ тетрәндерҙе һәм мин башҡа, ысынлап та, ҡулыма рюмка тотманым. Эске килгән ваҡыттар ҙа, стакан сәкәштерер һылтауҙар ҙа булманы түгел - булды. Шул мәлдәрҙә мин һәр ваҡыт үле тыуған баламды күҙ алдына килтерер булдым. Эсмәгәс, эше лә табылды, вахта ысулы менән төньяҡҡа эшкә сығып киттем. Ҡатыным бер-бер артлы өс баһадир табып бирҙе. Ауылдағы йорт-ҡураны яңыртып, бынан бер-нисә йыл элек ҡаланан фатир алдыҡ. Ауылдағы йортта улым ғаиләһе менән йәшәй. Ике ейәнгә өләсәй-олатайбыҙ. Икәүһе студент, иң өлкәндәре үҙебеҙ менән. Элек йөҙ грамм эсмәһәм, бауыры ла, бөйөрө лә, башы ла ауыртып йонсота ине, спорт менән шөғөлләнә башлағайным, улар ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты. Спортты һәм сәләмәт тормошто киң пропагандаларға кәрәк. Тән, йән таҙалығы, рух күтәренкелеге, физик һәм эске ныҡлыҡ тураһында китаптарҙы йәш ваҡытта уҡ уҡыһам, мин, моғайын, егерме йылға яҡын ғүмеремде заяға үткәрмәгән булған инем.

Йәш саҡта тиҙ генә бәхет формулаһын табырға ынтылдым. Әҙер формула юҡ икән. Уға эйә булыу өсөн, иң беренсе, һине нимә бәхетһеҙ итә, шуны табырға кәрәк. Мине бәхетһеҙ иткән сәбәптәрҙең иң ҙуры - эскелек икәнлеген белгәс тә, бәхетһеҙлектән арындым. Уны табыу өсөн ике тиҫтә йыллап ваҡытым үтте...

## Һығымта урынына

Үрҙә атап кителгән ике ағайҙың да яҙмышына ниндәйҙер кимәлдә шаһитлығым бар. Уларҙың береһе ҡаршы йортта йәшәне, икенсеһе күрше булды. Улар икеһе лә үҙҙәре һайлаған юл буйынса киткән. Береһе кеше ярҙамынан тыш йәки ҡултыҡ таяғына таянмай, бер аҙым да атлай алмай, икенсеһе иһә үҙе эшләгән коллективының намыҫын яҡлап, спорт ярыштарында ҡатнаша, юғары һөҙөмтәләр яулай, ял көндәрендә улдарын, ейәндәрен үҙе менән алып сыға. Ә уйлап ҡараһаң, икеһенең дә тормошо бер кеүек ине: бер ойошмала эшләнеләр, бер тирәлә йәшәнеләр, бергә эшһеҙ ҡалдылар, бергә эстеләр. Икеһенең дә яҙмышы бер төрлө тамамланыр кеүек ине. Тик бәхетле булыу теләге генә икеһенең ике төрлө булғандыр, күрәһең.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

Фокусҡа иғтибар туплағыҙ: ул ни тиклем асығыраҡ, һеҙ шул тиклем аныҡыраҡ эшмәкәрлек итерһегеҙ.

Уйланырға мәжбүр итергә тейешле һорауҙар шулар. Үҙегеҙҙең иғтибарығыҙҙы фокусҡа йыйыу һәләтегеҙҙе нисек баһалайһығыҙ? Бәләкәй эштәрҙә бөйөк оҫталыҡ күрһәтергә тура килдеме? Көсһөҙ яҡтарығыҙҙы бөтөрөү өсөн әллә күпме ваҡытығыҙҙы әрәм итеп, көслө яҡтарығыҙҙы үҫтереүгә ваҡытығыҙ ҡалмаған саҡтар булдымы? Аҙ ҡеүәткә эйә кешеләр һеҙҙең барлыҡ ваҡытығыҙҙы урламаймы? Әгәр шулай икән, тимәк, һеҙ фокусығыҙҙы юғалтҡанһығыҙ.

- Үҙ өҫтөгөҙҙә эшләгеҙ. Үҙегеҙҙең иң ҙур активығыҙ булып үҙегеҙ тораһығыҙ һәм шәхесегеҙгә иң ҙур зыянды ла үҙегеҙ килтерәһегеҙ.
- Өҫтөнлөктәрегеҙҙе үҫтерегеҙ. Бәлки, улар өсөн көрәшергә лә тура килер.
- Көслө яҡтарығыҙҙы тағы ла көсәйтегеҙ. Бары тик шулай итеп кенә һеҙ үҙ ҡеүәтегеҙҙе тулыһынса тормошҡа ашыра алаҫаҡһығыҙ.
- Тиңдәштәрегеҙ һәм коллегаларығыҙ менән эшләгеҙ. Яңғыҙ ғына эшләп йоғонтоло булып булмай.

**Өйгә эш**

**Фокусығыҙҙы яҡшыртыу өсөн түбәндәгеләрҙе эшләгеҙ:**

- Көслө яҡтарығыҙға иғтибар йүнәлтегеҙ. Эшегеҙҙә бигерәк тә уңышлы башҡарған өс йәки дүрт нәмәнең исемлеген яҙығыҙ. Уларға күпме ваҡыт бүләһегеҙ? Ысынлап та көслө булған өлкәләргә үҙ ресурстарығыҙҙың күпме процентын бағышлайһығыҙ. Хеҙмәтегеҙҙе ойоштороуға үҙгәрештәр индереүҙең шундай планын әҙерләгеҙ, унда 70 процент ваҡытығыҙ көслө яҡтарығыҙға йүнәлтелгән булырға тейеш. Әгәр бындай үҙгәрешкә әҙер түгелһегеҙ икән, моғайын, профессияғыҙҙы, эш урынығыҙҙы алмаштырыу йәки хеҙмәт карьераһын ҡайтанан ҡарау ваҡыты еткәндер.
- "Көсһөҙ" яҡтарығыҙҙы ябығыҙ. Эш урынында бигүк ырата алмаған өс йәки дүрт эш башҡарыуҙы маҡсат итеп ҡуйығыҙ. Был эштәрҙе кемгә ҡушырға мөмкин икәнен асыҡлағыҙ. Ул штатты арттырыу йәки яңы хеҙмәткәрҙәрҙе яллауҙы талап итәме? Эш буйынса коллегағыҙ менән үҙегеҙгә башҡарыуы ауыр булған эште бүлешеү өсөн уртаҡ тел таба алаһығыҙмы? Быны өсөн тейешле план төҙөгөҙ.
- Төп йүнәлештәргә баҫым яһағыҙ. Өҫтөнлөктәрҙе билдәләп һәм асыҡлап, иғтибар туплау тураһында уйлағыҙ. Үҙегеҙҙе көслө тип иҫәпләгән яңы кимәлгә күтәреү өсөн һеҙҙән нәмә талап ителә? Ниндәй яңы инструменттарға ҡытлыҡ кисерәһегеҙ? Тағы бер тапҡыр әле нисек эшмәкәрлек итеүегеҙ хаҡында уйлағыҙ һәм нимәнелер ҡорбан итергә әҙер булығыҙ. Тағы ла юғарыраҡ баҫҡысҡа менеү өсөн сарыф ителгән ваҡыт һәм аҡса - һеҙ эшләй алған иң ҙур инвестиция.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**

# ТВ ПРОГРАММАҺЫ





## 2 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.20 "Время обедать!"
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "В наше время" (16+).
16.10 "Они и мы" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Куприн". Драматический сериал (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Познер" (16+).
01.10, 03.05 "Военный ныряльщик". Худ. фильм (12+).
03.00 Новости.
03.35 "В наше время" (12+).
04.30 "Контрольная закупка".

